ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

15 йыл

8-14 июль (майай) 2017

№27 (757)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Ҡыуанырҙар ине ҡауҙылар... 3



Телдәр белгән - илдәр белгән 6



Икмәк һоранып сыҡмаç өсөн...

Ер реформаһын яңынан үткәрергә кәрәк! 8-9



Ниндәй йәмғиәттә йәшәйһең...

шуның йырын йырлайһың 13



ТВ-программа 14


***"Һинән бәхетһеҙерәк кешеләр ҙә бар был донъяла". Әлбиттә, был һүҙҙәр һине һыйындырыр ҡыйыҡ түгел, әммә улар ниндәйҙер дауылдан йәшеренергә етеп тора.***

***(Г. Лихтенберг).***

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Юл-транспорт хәрәкәте һәләкәттәрендә һуғыштағы һымаҡ әүмерҙәр өҙөлә. Ниңә был йәһәттән илдә тәртип урынлаштырып булмай? Ошо хакта ни уйлайһығыҙ?

***Ғайса ХӘЛИТОВ, Бөрйән район хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте һәм спорт бүлеге начальнигы:*** Әйткәндәй, был хаҡта минең күп кенә уйланғаным бар. Мәсьәләгә ниндәй генә яҡтан сығып ҡараһаң да, ахыр сиктә, шундай фекергә киләнә: бөтәһе лә тәрбиә тигән нәмәгә бәйле, минеңсә. Был, ғөмүмән, юл-транспорт хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға ғына ҡағылмай. Тәрбиә һәм тәртип мәсьәләләре йәшәйешебеҙҙең иң "аҡһаған" өлкәһелер ҙә, бәлки. Үҙенең ҡот осҡос фажиғәле эҙемтәләрен ул айырыуса бөгөн, техника, транспорт саралары нык әүҙемләшкән осорҙа, торған һайын йышыраҡ күрһәтә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, юл-транспорт хәрәкәте фажиғәләре кәмеүгә табан бара, тип әйтеп булмай, үкенескә. Әлеге шул тәрбиәһеҙлек арҡаһында кеше уйлана, һығымтаға килә белмәй, әллә теләмәй...

Йыйып ҡына әйткәндә, төрлө яҡтан техник әүҙемлек шарттарында йәшәргә әҙер түгелбеҙ, тип уйлайым мин. Юлдарҙың насар булыуы ла, ҡалаларҙа урамдарҙың тарлығы ла үҙенекен эшләй, әлбиттә. Юл-транспорт хәрәкәте фажиғәләренең 70-ләп проценты эскән килеш руль артына ултырыуҙан килеп сығыуын да яҡшы беләбеҙ. Быныһы инде тәрбиәһеҙлектең дә арьяғылыр. Эсер алдынан бит кеше уйларға тейеш: туҡта, миңә бит аҙаҡ машинаға ултырырға тура киләсәк, тип. Иң яҡшыһы - эсмәҫкә лә бит, тик беҙҙең халыҡ икенең береһен һайларға тура килгәндә, уйлап та тормай, фәҡәт эскелек яғына ғына ауа ла ҡуя шул. Мин үҙем күп йылдар инде машина йөрөтәм, ләкин эсеп юлға сыҡҡаным юҡ. Республика юлдарында ғына түгел, Рәсәй буйлап та йыш йөрөргә тура килә, Ҡара диңгеҙгә барғылайбыҙ. Эсмәгән хәлдә лә әле уйланаһың: юлда бер мин генә түгел бит, иғтибарлы, йыйнаҡ һәм тәртипле булыу иң тәүге шарт, тип. Күптәр, эсеп рулгә ултырыусыларға ҡарата закон йомшаҡ, тип әйтә әйтеүгә. Уныһы ла барҙыр, тик таныҡлыҡты тартып алыу ҙа машинаға күнеккән кешегә ярайһы ҡаты яза ул. Ошонан уйлап ҡараһаң, биш-алты йыл буйы уҡып алған дипломыңды тартып алһалар, яҡшы буламы? Унан һуң, штраф санкциялары ла байтаҡҡа арттырылып тора. 2015 йылда эскән килеш машина йөрөткән өсөн 50 мең һум штраф ҡаралған булһа, быйылдан уның күләме 300 меңгә тиклем барып баҫты. Шул уҡ ваҡытта 2 йылға водитель танытмаһы ла тартып алынасаҡ. Ләкин аҡылы булмаған кешегә былар ҙа йоғонто яһамаясаҡ. Сөнки эскән килеш ҡабат-ҡабат килеп эләгеүселәр ҙә бар бит. Тәртип, тәрбиә булмаһа, кешене штраф менән генә аҡылға ултыртып булмайҙыр ул...

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# "УРАЛ БАТЫР"ЛЫ ХАЛЫҠ БЕҘ!

**Бөрйән районында халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең республика конкурсы үтте. 19-сы тапҡыр ойошторолған оло сара бәйгегә килгән 27 команда ҡатнашлығындағы парад менән асылды. Бәйге әләмен күтәреү хоҡуғы былтырғы конкурста Гран-при яулаған Ишембай ҡыҙы Гөлфруз Хисмәтуллинаға бирелде.**



*Гран-приға Баймаҡ лицей-интернаты уҡыусыһы Гөлнара Ҡазарбаева лайыҡ тип табылды. "Сәсәнлек минең ҡанымда, өләсәйем һүҙ оҫтаһы булған, ә әсәйем шиғырҙар ижад итә. Тап 10 йыл элек ошо майҙанда минең апайым Вәсилә Ҡазарбаева гран-приға лайыҡ булғайны. Мин уның артынан эйәреп, оло хыялыма ҡаршы 12 йыл атланым. Ниһайәт, теләгемде тормошҡа ашырҙым. Ҡыуанысымдың сиге юҡ. "Урал батыр" йәшәне, йәшәй һәм йәшәйәсәк. Киләсәктә лә ошо оло исемгә тап төшөрмәҫкә ант итәм. Халҡыма, тыуған телемә һәм илемә лайыҡлы кеше булып йәшәйәсәкмен, ут сәсәсәкмен", - тине рухлы сығышында бәйге еңеүсеһе Гөлнара.*

(Дауамын 15-се биттә уҡығыҙ).

12+

✓ Ауылда йәштәр ҡалмай, тип зарланыр урынға, әйҙәгеҙ, балаларыбыҙға тыуған ерҙә лә матур, етеш тормош күтәргә мөмкин икәнен үҙ өлгөбөҙҙә күрһәтәйек, тимәксемен.



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛДА ҠАЛҺЫН БАЛАЛАР...

**Фирүзә ИШТӘКБАЕВА, Хәйбулла районы Сиҙәм урта мәктәбенең тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:** Ауыл - башҡорт халҡының рухи бишеге, тиҙәр. Тап шулай, әлбиттә, әммә халҡымдың рухи бишегендә бөгөн йәштәр ғаилә ҡороп, тормош көтөргә теләмәй - шуныһы эсте бошора. Алдыңғы ҡарашлы, белемле йәштәрҙең ҙур мегаполистарға йәшәргә күсеүенең сәбәбе, тәү сиратта, эш урындарына бәйле, әлбиттә. Унан һуң, ҡала шарттарында тормош көтөүе лә еңелерәк, бөтә унайлыҡтар бар, тип тә иҫәпләйҙәрҙер. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та шулай шул: ҡала кешеһе билдәле бер ваҡытын ғына эшендә үткәрә, ҡайтҡас, ял итергә мөмкинлеге бар, кәрәкле магазиндар ҙа аҙым һайын, буш ваҡытта күңел күтәреп, ял итеп алыр урындары ла күп. Ауылда бындай мөмкинлектәр юҡ, бында йыл әйләнәһенә йорт-ҡура, баҡса эштәре менән булаһың, мал көтмәйенсә лә йәшәп булмай. Унан бигерәге, ауыл халҡын хеҙмәтләндереүсе үҙәктәр булмауы насар. Аҙыҡ-түлек, хужалыҡ тауарҙары һатылған магазиндар бар барлыҡҡа, әммә уларҙа ҡалалағы менән сағыштырғанда хаҡтар ҙа ҡиммәт, тауарҙарҙы һайлап алыу мөмкинлеге лә сикле. Бөҙрәхана, банкомат, аяҡ кейемдәрен, техниканы йүнәтеү, фотоға төшөү һәм шуның кеүек башҡа кәрәкле хеҙмәттәр булмағас, ҡалаға йөрөргә тура килә. Ә бит элек ауылдарҙа социаль үҙәктәр була торғайны, унда эш урындары ла булдырылды, халыҡҡа ла унайлы ине.

Хәҙер бит мәғлүмәт заманы. Улар аша йәштәр үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып йәшәргә кәрәклеген дә, еңел генә аҡса эшләү ысулдарын да үҙләштерә. Ҡалала йәшәүе ҡулайлыраҡ икәнен дә шул телевизор, интернет мәғлүмәттәре аша белеп тора улар. Юғары белем алған йәштәр шуға ла ауылға кире ҡайтмай, былай ҙа эш урыны етмәгән ҡалаларҙа ҡала. Ә бит ауылға агрономдар, малсылар ғына түгел, уҡытыусылар, табиптар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, эшсе һөнәрҙәре үҙләштергән йәштәр ҙә кәрәк. Ауылға йән өрөргә теләһәк, йәштәрҙе артыҡ тәнҡитләмәү, уларҙың яңы башланғыстарын хуплау мөһим. Ауылда йәштәр ҡалмай, тип зарланыр урынға, әйҙәгеҙ, балаларыбыҙға тыуған ерҙә лә матур, етеш тормош көтөргә мөмкин икәнен үҙ өлгөбөҙҙә күрһәтәйек, тимәксемен. Ниндәйҙер эште беренсе булып башлап ебәреүҙән ҡурҡмаҫҡа, егәрле булырға күндереп үстерәйек уларҙы. Оло быуын кешеләренең ҡулы теймәгән эштәр күп ауылда, бары тик берәһе лә тотонмаған был эште, аҡылың етеп, яйға һалып ала ғына белеү фарыҙ...

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Юл-транспорт хәрәкәте һәләкәттәрендә һуғыштағы һымаҡ ғүмерҙәр өҙөлә. Ниңә был йәһәттән илдә тәртип урынлаштырып булмай? Ошо хаҡта ни уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**



***Рәлиә БИКТИМЕРОВА, 13 йыл стажлы автоһәүәҫкәр, Өфө районы Шамонино ҡасабаһы:*** Юлға сыҡҡанда, руль артына ултырған һәр кемдә иң беренсе яуаплылыҡ тойғоһо булырға тейеш. Үҙендең ғүмереңә, башҡа юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың именлеге, һине өйҙә көтөп ҡалған яҡындарыңдың тыныслығы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо. Бөгөн, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, водителдәр араһында бер-береһенә ҡарата ла хатта ихтирам юҡ. Яңыраҡ интернетта Башҡортостан буйынса ЮХХДИ етәксеһе Д. Ғилметдиновтың рәсми порталындағы һандарҙы күреп, шаҡ ҡаттым. Юл-транспорт хәрәкәте буйынса былтырғы йыл статистикаһын килтерә ул. Иҫерек килеш машина йөрөткән водителдәр ғәйебе менән 81 кеше яҡты донъянан киткән! Кемдәрҙер ғәзиз ул һәм ҡыҙҙары, атаһы йә әсәһе, башҡа һөйөклө кешеләрен мәңгегә юғалтҡан, тимәк. Ә ана шул аварияларҙа ғәйепле эскесе әҙәм үлтереүселәргә ҡарата ниндәй яза саралары күрелде икән? Был турала - ләм-мим...

Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре генә түгел, ә үҙеңдән башҡаларға ихтирам һәм иғтибар, тәртиплелек, ябай ғына мәҙәнилек сифаттары ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә үк тәрбиәләнергә, ныҡлы нигеҙ һалынырға тейештәр, тип уйлайым. Һәр балаға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен бәләкәйҙән үк тормошсан миҫалдар аша өйрәтеү хәйерлә. Әлбиттә, иң беренсе сиратта был йәһәттән яуаплылыҡ ата-әсә иңенә төшә. Һәр кем ҡағиҙәләрҙе өйрәнергә, белергә тейеш тип кенә түгел, ә был шәхсән минең үҙем өсөн кәрәк, тип, аныҡ маҡсат ҡуйып өйрәнергә тейеш. Икенсенән, юлдарҙың насар хәлдә булыуы ла күп аварияларҙың сәбәпсеһе. Әлбиттә, унан-бынан ямауҙар һалып, йүнәтелеп тора юлдар, ләкин уның сифаты бер-ике айға етерлек. Соҡор-саҡырлы юлдарҙы урап үткәндә кредитҡа ғына алынған машинаһын бәрҙергеләп, суд юлын тапаусылар ҙа күбәйә. Өсөнсөнән, ЮХХДИ инспекторҙары үҙҙәре белемле, намыҫлы булырға тейештәр. Руль артында ултырыусылар "текә"ме, баймы, урта хәллеме - юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға талап һәм яза саралары бер тигеҙ һәм ғәҙел булырға тейеш. Эскән килеш машина йөрөтөүсе берәй "текә" авария яһап та, был бәләнән еңел генә, аҡса биреп кенә ҡотолмаһын ине. Таныҡлыҡҡа имтихан биргәндән башлап, руль артында йөрөгән һәр кемгә лә бер тигеҙ мөнәсәбәт етешмәй шул әле беҙҙең юлдарҙа. Әлбиттә, видеокүҙәтеүҙәрҙең һанын арттырыуға ыңғай ҡараштамын. Йәшерен-батырыны юҡ, әйтеүемсә, инспекторҙарҙың төрлөһө бар: бәйләнергә сәбәп эҙләп, тәүҙә документтарыңды тикшереп, тәртиптә булһа, аҙаҡ башҡа төрлө һылтау табырға әҙер генә торғандары ла байтаҡ. Ҡайһы бер водителдәрҙең үҙ хоҡуҡтарын насар белеүе, ҡыйыуһыҙлығы, артыҡ ышаныусанлығы йыш ҡына намыҫһыҙ инспекторҙар ҡесәһе файҙаһына ғына була. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә булыр ине. Әгәр ошондай инспекторҙар был өлкәлә һаман да эшләй икән, тимәк, проблемалар әле генә хәл ителмәйәсәк. Инспекторҙар үҙ эштәрен белеп, намыҫ менән башҡарһын, ә уларҙың бындай эш сифаттары етәкселәре тарафынан тейешлесә баһаланһын ине.

***Илгиз ИШБУЛАТОВ, журналист, һәүәҫкәр велосипедсы:*** Был йәһәттән тәртип урынлаштырыу мөмкиндер, тип уйлайым. Тәү сиратта, техник сәбәптәрҙе барлап, уларҙы бөтөрөү буйынса эшләргә кәрәк. Беҙҙең юлдар, уларҙы ҡабул итеү стандарттары иҫкерҙе. Тағы, бөтөн машиналарға ла тиҙләк һәм хәрәкәт оҙайлығы күрһәткестәрен теркәй торған махсус ҡоролма - тахограф һәм абоненттың ҡайҙалығы тураһында спутниктарға хәбәр итеүсе система ҡуйыуҙы һәр кемгә мәжбүри итергә кәрәктер, тип уйлайым. Тик ҡулланыусы иҫәбенә эшләнмәһен ине был. Ҡыйбатлы приборҙарҙы машинаға ҡуйҙырыуҙы төрлө дәүләт субсидиялары, йә булмаһа, транспорт һалымында ташламалар ярҙамында тиҙләтергә булалыр, тип уйлайым. Кеше факторына килгәндә, юл һәләкәттәренең күпселеге - кеше эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе. Ә кеше иһә, ыңғай йоғонтоға еңел бирелә торған йән эйәһе. Беҙҙең барыбыҙҙың да өйрәтелгән эттәрҙе күргәнебеҙ бар. Этте теге йәки был командаға өйрәтеү өсөн нимә кәрәклеген барыбыҙ ҙа беләбеҙ: ҡабатлау һәм тәмлекәс менән "ҡамсы". Тәмлекәс тигәндәй, автоһәүәҫкәрҙәргә 5, 10 йыл дауамында аварияһыҙ йөрөүе өсөн дәрәжәләр бирелһә, был уларҙың белемен үҙаллы камиллаштырыуға булышлыҡ итер ине, тип уйланыла. Тағы иң "бәкәлгә һуҡҡаны" - ҡағиҙә боҙоусыларҙы яуапҡа тарттырыу механизмы. Закон түрә-ҡара, байҙар өсөн дә, ярлыяға өсөн дә бер тигеҙ ғәҙел булырға тейеш. Бының өсөн закон һаҡсыларының һәр аҙымын контролдә тота торған техник саралар файҙалылыр. Был, әлбиттә, яңылыҡ түгел: АҠШ полицейскийҙары күптән видео, аудио һәм спутник күҙәтеүе аҫтында эшләй. Машиналарының эсенә лә, тышына ла ҡуйылған онлайн-камералар, микрофондар арҡаһында улар үҙҙәренең һәр аҙымын үлсәп баҫырға мәжбүр. Техника заманында быларҙы эшләү дәүләт өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫағына шигем юҡ. Ахырҙа, иң "бер ҡатлы" тәҡдимем шул: Жак Фреско әйтмешләй, автомобилдәрҙең хәүефһеҙлеген арттырырға кәрәк. Двигателгә тиҙлек сикләгесе, кузовҡа рама һәм ҡабырға бамперы, шулай уҡ, юлда ҡаршылыҡ осраһа, машинаны туҡтата торған датчиктар ҡуйыу ҙа ҡамасауламаҫ ине. Былары - автомобиль етештереүселәргә сәләмем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың бишенсе составтағы Йәмәғәт палатаһы ағзалары менән осрашты. Осрашыуҙа демография һәм ғаилә институтына ярҙам итеү, ауыл еренә медицина хеҙмәткәрҙәрен ҡайтарыу, дәүләткә ҡарамаған секторға тапшырылған социаль хеҙмәттәр теҙмәһен киңәйтеү, патриотик тәрбиә биреү буйынса эшмәкәрлеккө көйләү, милли телдәге балалар телевидениеһын үҫтереү, талантлы сығарылыш уҡыусыларына ярҙам итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтайҙың яҙғы сессиялағы аҙаҡҡы ултырышын республика Башлығы Рөстәм Хәмитов асты. Ултырыштың көн тәртибенә индерелгән 13 закон проекты тәүгә тикшерелде. Улар иҫәбендә "Умартасылыҡ тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проекты бар. Ул республикаға йоғошло һәм инвазион сирле бал ҡорто ғаиләләрен индереүгә юл ҡуймауға, башҡорт тоҡомло ҡорттарҙың генофондын һаҡлауға, уларҙы үрсетеү өсөн ҡулай шарттар булдырыуға йүнәлтелгән.

✓Өфөлә республика медицина-генетика үҙәге барлыҡҡа киләсәк. Башҡортостан Хөкүмәтендә уны булдырыу тураһындағы Ҡарарға ҡул ҡуйылды. Ғилми учреждениеһы Башҡортостан Башлығы башланғысы буйынса Башҡорт дәүләт университетының биология факультетының генетика һәм фундаменталь медицина кафедраһы ҡарамағындағы заманса үҙәк нигеҙендә асыу күҙаллана. Биология фәндәре докторы Эльза Хөснөтдинова һүҙҙәренсә, яңы үҙәк республика һәм бөтә Волга-Урал төбәге халҡын нәҫел, онкология һәм социаль әһәмиәтле ауырыуҙарҙы заманса юғары технологик молекуляр-генетика алымдары менән иртә диагностикалау һәм дауалау спектры менән тәьмин итә аласаҡ.

✓Рөстәм Хәмитов "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәкара конкурсы, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсы һәм уның сиктәрендә уҙғарылған "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы", "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" һәм "Йәш йыл уҡытыусыһы" конкурстары лауреаттарына Башҡортостан Башлығы премияларын биреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

*ҺӨЙЛӘҺӘҢ - ҺҮҘ...*

**Баш ҡалабыҙҙа талантлы рәссамдар, скульпторҙар бик күп, шуныһы ҡыуаныслы. Һәм тағы ла шуныһы яҡшы: улар уҙ оҫтаханаларына ғына бикләнеп ижад итмәй, ә Өфөбеҙҙе, уның урамдарын, парк һәм скверҙарын биҙәү-матурлауға ла бик ҙур көс һала. Баш ҡаланың байтаҡ урындары ана шул талант эйәләренең асыҡ оҫтаханаһына әйләнә бара.**

# ҠЫУАНЫРҘАР ИНЕ ҠАУҘЫЛАР...



Миҫал өсөн улар ижад иткән арт-объекттарҙың бер нисәһен генә әйтеп китеү ҙә етә: иң тәүҙә ул, әлбиттә, өфөләр тарафынан "Өс шөрөп" атамаһын алып өлгөргән баш ҡалабыҙ исеме - "ӨФӨ". Ә нинә, шөрөп булһа һуң? Был хатта һәйбәт тә! Иң мөһим, иң ышаныслы, ныҡытыусы, беркетеүсе мәғәнәһен бирә бит ул атама. Баш ҡалабыҙҙы яратып, уны ғүмерлек тейәгә иткән халыҡтарҙы берләштереп, өфөләр итеүсе билдә булараҡ ҡабул ителә ул. Ул шулай уҡ камиллыҡ, тимәк, ыңғай энергетика үҙәге символы ла.

Күперҙе үткәс, "Дуҫлыҡ монументы" ҡаршыһындағы майҙансыҡта беҙҙе егәрле, эшсән нәҙекәйбил - Бал ҡорто ҡаршылай. Башҡортостаныбыҙ брендына әйләнгән бал ҡорто һыны, әлбиттә, ел-дауылға, ҡар-ямғырға бирешмәй торған мөһабәтерәк көүҙәләнешкә лайыҡтыр, тип иҫәпләйем мин, мәҫәлән. Сөнки ҡар ирееп яткан болотло, еүеш көндәрҙең береһендә шул тирәнән үтеп барғанда автобус тәҙрәһенән ҡот оскос бер бөжәк-ҡараҫҡы һымаҡ күренде ул: буяуҙары йыуылған, ҡанаттары урынына тимерсыбыҡтар һерәйеп сыҡҡан, еүешлектән ҡарайған - ҡысҡаһы, был "арт-объект"та гәжәйеп матур бал ҡортон таныуы ла бик ҡыйын ине яҙғыһын. Ҡыуанысҡа, уны әле яңынан матурлап, сәскәләр менән биҙәп ҡуйғандар.

Артабан Менделеев урамы буйлап "Башҡортостан" сауҙа үҙәге алдында беҙҙе ысынынан айырып алғыһыҙ өс ат ҡаршылай. Дөрөҫөрәге, уларҙың береһе - ҡолон. Бер һүҙ ҙә юҡ: гүзәл күренеш.

Саҡ ҡына ары барғас, СССР-ҙың 50 йыллығы урамына боролған урынға яңыраҡ бер тирмән менән ҡоҙоҡ бураһы, сәскә түтәле тейәлгән арба килтереп ултыртҡандар. Ниңә был объекттар өсөн тап ошо урын һайланғандыр - әйтеүе ҡыйын. Ҡаланың боронғораҡ, ағас өйлө иҫке кварталдарының береһендә улар тәбиғиерәк күренер ине, моғайын.

Арыраҡ, "Аҡбуҙат" ипподромына юл аша ҡаршыла (их, теге аттар бына ҡайҙа кәрәк ине!) ҡара-ҡаршы ултырған ир менән ҡатын һыны, ҡулдарында - Ер шары. Был скульптура, киреһенсә, "Башҡортостан" сауҙа үҙәгенең "Лайфстайл" яҡлап майҙансығында урынлы булыр ине.

"Салауат Юлаев проспектында коммуналь хеҙмәткәрҙәр булышлығында тағы ла бер нисә ҡыҙыҡлы арт-объект һәм композиция барлыҡҡа килде," тип хәбәр иттеләр беҙгә күптән түгел Октябрь районы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегенән. Дуҫлыҡ монументы яғынан Октябрь районына ингәндә, водителдәрҙе баш ҡалабыҙ символы - һыуһар ҡаршы ала. Яңыраҡ бер нисә кешенән: "Ни өсөн Өфө гербына һыуһар төшөрөлгән икән?" - тигән һорауҙы ишетергә тура килгәйне. Шуға күрә был турала белмәгән тағы ла кемдәрҙер бар икән, унайлы осраҡтан файҙаланып, шуны ғына әйтергә кәрәктер: боронғо Өфөнөң эргә-тирәһендә ҡиммәтле тиреле ошо йәнлектәр бик күп үрсеп киткән булған. 16-сы быуаттағы Өфө ҡалаһының мисәтендә лә шуға күрә тап һыуһар төшөрөлгән була. Ә мәғәнәһе уның шуға ишаралай: ҡасандыр һыуһарҙар яратып төйәк иткән ҡалабыҙ экологияһын бөгөнгө көндә лә таҙа, матур, унайлы итеп йәшәргә бурыслыбыҙ.

Революцион һәм Ленин урамдары киҫелешендә шулай уҡ яңы бер һоҡланғыс артобъект - йәшел йөрәк барлыҡҡа килде. Көнбағыш сәскәләре менән биҙәлгән ҙур йөрәк аҫтында тимерҙән үрелгән яндауырҙар менән ағастан эшләнгән бәләкәй генә күпер урынлашҡан. Йөрәк һыны лампалар менән ҡаймаланған, шуға конструкция төндә балҡып, тағы ла матурыраҡ күренә. Ғашиҡтарға был арт-объект бигерәк тә оҡшап төштө, улар күперҙә тороп фото төшөргә ашыға. Оҙаҡламай "йәшел йөрәк" яңы өйләнешкән йәштәрҙең һәм "Салауат Юлаев" хоккей командаһы көйәрмәндәренең яңы изге урынына әйләнәсәк, тип күҙаллана. Бик мәслихәт!

Әйтеүемсә, урынлымы-урынһыҙмы - бына ошондай мини-скульптуралар байтаҡ Өфөлә. Үкенескә, уларҙың барыһын да һанап бөтөүе мөмкин дә түгел. Һәйбәт, яҡшы, кешелекле күренеш. Улар ҡала халҡы күңелен матурлыҡҡа, яҡтылыҡҡа әйҙәп тора кеүек. Тик бына әлегесә урынлымы-юҡмы, тигәнемә ҡағылышлы тағы бер миҫал. Әле яңы ғына Өфөнөң Салауат проспекты трассаһы ауышында, хатта ки... соҡор бер урында гүзәл күренеш - "Ҡауҙы ғаиләһе" һыны пәйҙә булды. Ҡауҙылар бик матурҙар, ысын тип торорһоң! Тик бына йәлләп тә ҡуйҙым үҙҙәрен. Был ҡоштарҙың тәбиғәтенә бейеклек, юғарылыҡ хас. Улар ояны ла бит бейек-бейек урындарға: ҡыйыҡ баштарында, йорт янындағы ағас, электр, телеграф бағаналары баштарында төҙөй. Ә беҙҙә, Өфөлә, уларҙы күрәләтә соҡорға алып барып ултыртҡандар! Ата ҡауҙы муйынын һоноп, һауаға тилмереп баға түгелме? Исмаһам, бында уларға ҡарап һоҡланыусылар табылһа, ярай ҙа. Югиһә, машинала трасса буйлап китеп барғандарға ла күренерлек түгел улар. Бейегерәк берәй бағана ултыртып, шуның башына күсереп ҡуйһалар, эй ҡыуаныр ине ҡауҙылар!

Ғөмүмән, баш ҡалабыҙ һуңғы йылдарҙа йылдам үҫешә, әүҙем төҙөкләндерелә, урамдарыбыҙ йәшеллеккә, сәскәләргә күмелә. Ошо фонда әлеге арт-объекттарҙың да тәбиғи күренешкә әүерелеүен күрге килә. Уларҙы киләсәктә уйлап, урын-еренә еткереп, теге йәки был урынға ярашырлыҡ итеп планлаштырыу кәрәктер, тим. Тейешле урынында тормаһа, матур эшләнгән, хатта тәрән йөкмәткеле скульптуралар ҙа мәғәнәһен юғалтыуы, көрмәлекһеҙгә әйләнеүе ихтимал бит, юғиһә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында гәҙәттән тыш хәлдәр арҡаһында торлағын юғалтҡан граждандар өсөн ҡыҙыу элемтә асылды. Хәҙер зыян күргән тип танылған граждандар (495) 647-11-59 телефоны аша торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса ярҙам күрһәтеү тәртибе тураһында мәғлүмәт алыу мөмкинлегенә эйә. Эш көндәрендә иртәнге сәғәт 10-дан киске 6-ға тиклем мөрәжәғәт итергә була.

✓Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы илдә етештерелгән традицион ризыҡтарҙы тышҡы баҙарға һатыуға сығарырға ниәтләй, тип хәбәр итә "Известия" гәзите. Ведомство "Агросәнәғәт продукцияһы экспортлау" өҫтөнлөклө проекты сиктәрендә Ауыл хужалығы продукцияһына булышлыҡ итеү һәм үҫтереү концепцияһын әҙерләй. Әңгәмәләшеүселәр экспорт өсөн Вологда майын, башҡорт балын, "Нарзан" минераль һыуын, Алтай сырын, Краснодар шарабын, Луховицк ҡыярҙарын атаған.

✓Теләүселәр өсөн Өфөлә саф һауала ойошҡан рәүештә иртәнге күнекмәләр мизгеле башланды. 5 июлдән 16 август тиклем һәр шаршамбы иртәнге сәғәт 9-сы яртыла "Мир" сауҙа һәм күңел асыу үҙәгенең ҡыйығында фитнес-иртә үтә. Ҡатнашыусылар функциональ тренинг, йога, бейеү һәм бокс менән шөғөлләнә. Өфө хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, күнекмә 55 минут дауам итәсәк. Төп шарттар: 14 йәштән өлкәнерәк булыу һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн уңайлы кейем. Алдан яҙылыу өсөн телефон: 8 964 964 22 52.

✓Өфөлә беренсе Рәсәй-Иран социаль-мәҙәни форумы уҙҙы. Уны Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ һәм Туризм буйынса федераль агентлыҡ ярҙамында Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ һәм Башҡортостан Хөкүмәте ойошторҙо. Форумға Иран Ислам Республикаһы Президентының милли һәм дини аҙсылыҡ мәсьәләләре буйынса махсус ярҙамсыһы Али Юнеси етәкселегендәге Иран делегацияһы килде. Төбәк-ара хеҙмәттәшлеккә арналған форум ике ил халҡына бер-береһенең мәҙәниәтен һәм милли йолаларын тәрәнерәк белергә ярҙам итәсәк, тип билдәләнде.

**“Башинформ”дан.**

✓ Кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ, күпселек өлкәләрҙә белемле, үҙ-үҙҙәрендә ышанысльі, белем байлығы менән артабан да яҡшы итеп эшләрлек белгестәр етмәй. Шуға минең һеҙгә үтенесем бар - кире ҡайтыу варианттарын аңда йөрөтөгөҙ.



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢҒЫҘ ӘСӘЙҘӘР ҘӘ...

✓ **Торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж тулы булмаған ғаиләләр шулай уҡ 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған социаль түләү алыуға иҫәп тота ала.** Ошо хаҡта Йәмәғәт палатаһы ағзалары менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе. "Башта положение тик тулы ғаиләләргә генә ҡағыла ине. - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Положениеңы ҡайтанан ҡарауҙарын һораным. Сиратта торған яңғыҙ әсәй, яңғыҙ атай ҙа ошо 300 мең һумды алырға тейеш. Хәҙер документҡа үҙгәрештәр индерҙеләр, сөнки тыуымды дәртләндерергә кәрәк". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, март айында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала демографик хәлде яҡшыртыу буйынса өҫтәмә саралар ҡабул итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Башҡортостан Республикаһында йәш ғаиләләргә ярҙам итеү һәм тыуымды арттырыу маҡсатында 2017 йылдың 1 ғинуарынан тәүге бала тыуғанда торлаҡ һатып алыу (төҙөү) йәки ипотека торлаҡ кредиты буйынса төп бурыстың ҡалған өлөшөн ҡаплау өсөн 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған социаль түләү билдәләнә.

✓ **Республикала төбәктең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тарафынан ойошторолған етенсе хәйриә акцияһы башланды.** Уның маҡсаты - ауыр хәлгә тарыған балалар өсөн мәктәп кәрәк-яраҡтары йыйыу. "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" акцияһы 31 августа тиклем уҙа. Халыҡтан, эшҡыуарҙарҙан һәм ойошмаларҙан мәктәп кәрәк-яраҡтарын республика ҡала һәм район халҡын социаль хеҙмәтләндереүсе комплекслы үҙәктәрҙә ҡабул итәләр. Канцелярия тауарҙары, дәфтәрҙәр, балалар ижады һәм һүрәт төшөрөү дәрестәре өсөн әйберҙәр яңы килеш ҡабул ителә. Портфелдәр, мәктәп формаһы, дәреслектәр, нәфис әҙәбиәт яңы йәки яҡшы торошта тотонолған булыуы мөмкин.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр индереүсе ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Мәсәлән, яңы юл хәрәкәте ҡағиҙәләре буйынса, ете йәштән кесерәк балаларҙы машина салонында ҡалдырыу тыйыла - тукталыу урынында бала менән бергә бәлиғ кеше ҡалырға тейеш. Ҡарар атаәсәләрҙән ете йәшкә тиклемге баланы уның ауырлығына һәм буйына тап килгән махсус тотоп тороусы ҡоролмала йөрөтөүҙе талап итә. Ете йәштән 12 йәшкә тиклемге балалар өсөн ошондай ҡоролма еңел машинаның алғы ултырғысында йәки машинала хәүефһеҙлек ҡайышы булмағанда мотлаҡ. Тимәк, артҡы ултырғыста баланы машиналағы ғәҙәти ҡайыш менән электереү ҙә етә. Шуның менән бергә Рәсәй Эске эштәр министрлығы Дәүләт автоинспекцияһы балаларҙы ете йәше тулғандан һуң да тотоусы ҡоролмаларҙа йөрөтөргә кәңәш итә.

✓ **Яңы уҡыу йылында Өфө дәүләт авиация техник университетының бер нисә филиалында үҙгәрештәр буласаҡ.** Атап әйткәндә, Туймазылағы филиал 1 сентябрҙән ябыла. Бындай ҡарар предприятиелар тарафынан бөтөнләй ярҙам булмау, йәғни маҡсатһыҙ уҡытыу менән бәйле ҡабул ителде. Өфө дәүләт авиация техник университетының Нефтекама филиалы Башҡорт дәүләт университетының филиалы менән берләштереләсәк. Яҡынса баһалар буйынса, бында кәберәк инженер белгестәре әҙерләү йүнәлеше көтөлә. Стәрлетамаҡта өс филиалды берләштереү күҙаллана һәм киләсәктә айырым политехник профилле институт асыу ҡарала. Ишембайҙағы филиал үҙ эшен үҙгәрешһеҙ дауам итәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БЕҘҘЕКЕЛӘР - УЙЫНДАРҘА



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов етәкселегендәге рәсми делегация Литваның Каунас ҡалаһында 51-се Халыҡ-ара балалар уйындарында ҡатнаша.**

Рәсми саралар ваҡытында Башҡортостан вәкилдәре МДИ етәкселеге менән осрашып, 2019 йылда Өфөлә үтәсәк уйындар буйынса ойоштороу мәсьәләләрен ҡараны. Артабан яҡташтарыбыҙ Каунас ҡалаһы мэры менән осрашты. 5 июлдә МДИ-ның генераль ассамблеяһының киңәйтелгән ултырышында алдағы дүрт йылға үҫеш стратегияһы буйынса фекер алышыу ойошторолдо. Спорт ғаиләһенең яңы ағзалары - Каунас, Нью-Тайбэй, Инсбурк менән танышыу булды. Шулай уҡ яңы комитет һайланды. МДИ Комитеты президенты посын Торстен Раш, генераль секретарь посын Ричард Смит һаҡлап ҡалды. Комиссияға Рәсәй, АҠШ, Канада, Швейцария, Тайбэй, Австрия, Көньяҡ Корея һ.б. илдәр вәкилдәре инә. Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса Техник комиссияға ағзалыҡҡа дәғүә итеүсе 19 кеше араһынан өфөлө Андрей Кривошеев иң күп тауыш йыя. Бынан тыш, МДИ етәкселеге сираттағы йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарының Өфөлә үтәсәген анонслап, Башҡортостандың баш ҡалаһында ярыштарҙың юғары кимәлдә ойошторолоуын билдәләне.

Быйыл республиканың баш ҡалаһы исеменән 13 спортсы өс спорт төрөндә сығыш яһай: еңел атлетика, стритбол һәм дзюдо. Уларҙан тыш, Халыҡ-ара балалар уйындарында донъяның йөҙгә яҡын ҡалаһынан мең ярым самаһы спортсы, шул иҫәптән Мексика, АҠШ, Бөйөк Британия, Швейцария, Израиль вәкилдәре ҡатнаша. Был юлы Өфө - Рәсәйҙән берҙән-бер ҡатнашыусы.

## БЫЛАР АЙЫРЫУСА ШӘПТӘР!



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға тапшырған сығарылыш уҡыусылары менән осрашты.**

- Һеҙҙең менән осрашыуҙы имтихандар ваҡытында күрһәткән яҡшы һөҙөмтәләрегеҙ өсөн рәхмәт әйтеүҙән башлағым килә, - тине Рөстәм Хәмитов. - Берҙәм дәүләт имтихандары ваҡытында күп фәндәр буйынса 100 балл туплаған бер төркөм егет-ҡыҙҙарҙың барлығы бик шәп. Иң мөһиме - кемдер Мәскәүҙә, Петербургта, башҡа ҡалаларҙа йәки хатта сит илдә уҡыһа ла, минең ҡарашҡа, беҙгә эшләргә ҡайтырға тейеш. Был минең өсөн бик мөһим, сөнки кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ, күпселек өлкәләрҙә белемле, үҙ-үҙҙәрендә ышанысльі, белем байлығы менән артабан да яҡшы итеп эшләрлек белгестәр етмәй. Шуға минең һеҙгә үтенесем бар - кире ҡайтыу варианттарын аңда йөрөтөгөҙ һәм уларҙы үҙегеҙҙең артабанғы карьерағыҙҙа иң мөһим итеп ҡуйығыҙ. Ә мин Мәғариф министрлығын, уҡытыусыларыбыҙҙы, мәктәптәрҙе республикабыҙға ысынлап файҙа һәм уңыш килтерә алырлыҡ һәләтле егеттәр-ҡыҙҙар барлығын иҫтә тотоуҙарын һораясаҡмын.

Балаларҙы оҙатып килгән уҡытыусылар менән әңгәмә барышында олимпиадаларға әҙерлек процесын камиллаштырыу мәсьәләләре тикшерелде. Башҡортостан Башлығы һәр талантлы сығарылыш уҡыусыһы менән шәхсән рәүештә эшләү, уларҙың юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң республикала уңышлы эшләүҙәре өсөн шарттар булдырыу кәрәклеген билдәләне һәм бөгөнгө йөҙ балл йыйыусылар менән бер йылдан осрашыу үткәрергә тәҡдим итте.

БАШ ҠАЛАМ

# ЯМҒЫР ЯУА...

## урамдарҙы һыу баҫа!



**Быйыл, тәбиғәт, ысынлап та, кешеләрҙе лә, етәкселекте лә түҙемлеккә һынай, шикелле. Ҡышын халыҡ ҡар тотҡононан сыға алмай бер булһа, ошо көндәрҙә баш ҡалала яуған ҡойма ямғыр һөҙөмтәһендә ҡайны бер урамдарҙы ысын мәғәнәһендә һыу баҫты. Шаһиттар белдереүенсә, хатта һыу магазиндарға ла ингән. Социаль селтәрҙәргә һалынған фото һәм видеодәлилдәр раҫлауынса, урыны менән һыу машиналарҙың тәгәрмәсен күмә яҙған. Ошо ғәҙәти булмаған күренеш сәбәптәре хаҡында гәзит уҡыусылар ни уйлай икән? Бөгөн һорауҙарыбыҙҙы мәҙәни матбуғат сараһы - "Тамаша" журналының бүлек мөхәррире Сәриә ИШЕМҒОЛОВАға төбәнек.**

➔ **Өфө урамдарын һыу баҫыу сәбәптәрен халыҡ ямғыр һыуҙарын ағыҙыу системаһының йүнләп эшләмәүенә бәйләһә, ҡала хужалығы хеҙмәткәрҙәре быны граждандарҙың тәртипһеҙлегенә ҡайтарып ҡалдыра: улар теләһә ҡайҙа ташлаған сүп-сар канализация системаһына төшөп, уларҙың тығылыуына килтерә. Ә һеҙ был хаҡта нindәй фекерҙә?**

- Миҙал ике яҡлы булғандай, ике яҡ та гәйепле, тип уйлайым. Һыу ағыҙыу системаһы, беренсенән, иҫкергән, икенсенән, улар бөтә урамдарҙа ла үткәрелмәгән. Ә Өфө халҡына һәм ҡунаҡтарға килгәндә, күпселеге сүпте теләһә ҡайҙа ташлай, бының өсөн оят булып та китә. Бына бер көн генә магазиндан бер егет сыҡты ла, яңы ғына һатып алған көнбағыш ҡабын йыртып асып, көнбағышын кеҫәһенә тултырҙы, ә ҡабын ырғытып китте. Уның кеүектәр аҙым һайын осрай. Көнбағышы ҡапта ғына яҭһа ла була бит... Тағы ла бер күренеш: әсә

Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев "Коляда-Plays" XI халыҡ-ара заманса драматургия фестивалендә иң яҡшы режиссура өсөн бүләкләнде. Фестивалгә театр репертуарындағы "Хыялға ҡаршы" спектакле тәҡдим ителгәйне. "Коляда-Plays" Екатеринбургта үтте.

✓Алтай Республикаһының Барнаул ҡалаһында һабантуй байрамы уҙҙы. Унда тәүге тапҡыр Башҡортостан делегацияһы - "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Дәүләтбәков һәм Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Сәйҙә Ильясова ҡатнашты. "Барнаулда Башҡорт үҙәге эшләй, уның рәйесе Тимур Әйүпов. Уларҙың мәғлүмәттәре буйынса, Барнаулда 73 башҡорт йәшәй. Ҡурайсы Жәүҙәт Килдейәров, Алтайҙа 30 йыл самаһы йәшәүсе Балаҡатай районының Ураҡ ауылынан Фәнил Хәйретдинов төп ойоштороусылар булды", - тип билдәләне Артур Дәүләтбәков.

✓Илеш районының Үрге Йәркәй ауылында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Илеш районы хакимиәте һәм Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы ойошторған 2-се "Башҡорт йәштәре дуҫтарын йыя" милләт-ара асыҡ форумы булып үтте. Унда республиканың 36 районынан 300-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Киләһе, өсөнсө, форум Салауат районында үтәсәк. Илеш районы башлығы Илдар Мостафин тантаналы шарттарҙа эстафетаны Марс Кашаповҡа тапшырҙы.

✓Шишмә районында XIII Башҡортостан мосолмандары йыйылышы үтте. Дин әһелдәре бында ерләнгән республиканың беренсе имамы Хөсәйенбәкте хәтергә алыр өсөн йыл һайын байрам сьезына йыйыла. Сарала ҡатнашыусылар "Аҡ зыярат" ҡәберлегендә арҙаҡлы мәғрифәтсенең музей комплексында булды, төбәк имамдарының тантаналы йыйылышы үтте. Йыл һайын уҙғарылған "Мин Исламды яратам" Ҡөрьән уҡыусылар бәйгеһе осрашыуҙың төп сараһы булды. Унда төрлө йәштәге балалар Изге Яҙманы уҡыу һәм доға-сүрәләрҙе белеү оҫталығында ярышты.

✓Республика Дәүләт автоинспекцияһы матбуғат хеҙмәтенең мәғлүмәттәре буйынса, уҙған аҙнаның аҙағында Салауат Юлаев проспектында сәғәтенә 40 саҡрым тиҙлек сикләүе тураһындағы юл билдәләрен сисә башланылар. Шулай уҡ проспектта юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы автоматик рәүештә фототеркәү камераларын регламент үҙгәрештәренә ярашлы көйләү ҙә дауам итә.

***✓ Бала-саға, йәштәр, хатта өлкәндәр ҙә һыу буйында шешлек ашап, һут, һыра, башҡа төрлө эсемлектәр эсеп ваҡыт үткәрә. Һыу инеү миҙгеле - һыуҙа йөҙөп, ҡояшта ҡыҙынып, тәбиғәттә булып, тән һәм йән өсөн ял итеү булһын ине лә бит.***

# ЙӘЙЕН - ЯМҒЫР, ҠЫШЫН...



**Ҡала халҡының уңайлы йәшәүенең төп аспекттарының береһе булып ирегән ҡар һәм ямғыр һыуҙарын ағыҙыу мәсьәләһе тора.**

Баш ҡалала үткән айҙа уртаса күрһәткестәрҙән 254 процентҡа артыҡ яуым-төшөм күҙәтелде. Ә инде 28 июндә ярты айлыҡ норма яуҙы. Был көндә Өфө ҡалаһы хакимиәтенең социаль селтәрҙәрҙәге рәсми биттәренә урамдарҙы һыу баҫыуы тураһында 132 мөрәжәғәт килде.

Бында шуны билдәләп китергә кәрәк: ямғыр күләме күп булғанда, канализацияларға ҙур көсөргәнеш тура килә. Шулай уҡ һыуҙарҙың тиҙ генә ағып төшөүенә көслө елдә өҙөлгән япраҡтар, һынған ботаҡтар, урамда ятҡан сүп-сар ҡамасаулай. Улар канализация селтәре өҫтөндә ятҡан рәшәткәләргә йыйылып, һыу ағыуын тотҡарлай. Шуға күрә һәр районда рәшәткәләрҙе таҙартыусы бригадалар ойошторолған. Көслө ямғырҙар эҙемтәләрен улар бер сәғәт - сәғәт ярым ваҡытта бөтөрә.

Бөгөн ҡала территорияһында 494 километр ямғыр һыуы ағыу канализацияһы системаһы бар. Шуларҙың 230,8 километры кварталдар араһындағы территорияларҙа урынлашҡан дренаж системаһы, 87,8 километры - ведомстволарға ҡарай һәм улар тарафынан хеҙмәтләндерелә. 43 километрының бөтөнләй хужаһы юҡ, 132 километрҙы муниципалитет хеҙмәтләндерә. Әгәр уларҙы урамдар буйлап ҡараһаҡ, ошо селтәр 200 урамдан үтә, уларҙың 88-е - муниципалитет ҡарамағында һәм тейешле кимәлдә тотолоп, тотҡарлыҡһыҙ эшләй. Ә бына хужаһыҙ селтәрҙәрҙең 87 проценты туҙған.

Үҫеш темптарын иҫәпкә алып, 2003 йылда "Ленкомстройпроект" институты ябыҡ акционерҙар йәмғиәте эшләгән ямғыр һыуҙары канализацияһын үҫтереү схемаһына ярашлы, тағы ла 300 километр канализация, 100 километр асыҡ һыу оҙатҡыс, 14 насос станцияһы һәм 30 таҙартыу ҡоролмаһы төҙөргә кәрәк. Бюджет елкәһенә был да ҙур сығым булып ята, сөнки төрлө диаметрлы 1 километр ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы һалыу 5,3 миллион һумдан 13 миллион һумға тиклем барып баҫа. Шуға ҡарамаҫтан, йыл һайын яңы участкалар сафҡа индерелә, иҫкеләре реконструкциялана.

Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов яңы объекттар төҙөгәндә ямғыр һыуҙарын ағыҙыу канализацияһына ла иғтибар бирелергә тейешлеген билдәләй. "Ул да электр энергияһы, эҫе һыу һәм газ кеүек үк, мөһим коммуникация", - ти ул.

# ЕТӘКСЕ МЕНӘН ОСРАШЫУ



**Өфө ҡала хакимиәте башлығы май айынан башлап баш ҡала районларының һәр береһендә граждандар менән осраша. Күптән түгел Киров районы халҡы ла мэрға үҙҙәрен борсоған һорауҙар биреп, яуап алыу бәхетенә өлгәште.**

Надежда Ушанова Мөбәрәков урамы, 2/5 адресындағы йорттоң стеналарын йылытыу кәрәклеген белдерҙе. Ҡышҡыһын ҡайһы бер фатирҙар, арҡыры стеналар туңыуы һөҙөмтәһендә, бәҫләнгән. Яуаптан мәғлүм булыуынса, был фатирҙарҙа, өсөнсө кварталда, тышҡы стеналарҙы йылытыу планлаштырылған, эш йылытыу миҙгеле башланғансы тамамланырға тейеш.

Шулай уҡ мөрәжәғәт итеүселәр Киров урамы, 44 адресы буйынса урынлашҡан йорттоң күтәрмәләрен ремонтлау, Дыуан бульвары, 30 адресы буйынса урынлашҡан йорттоң терәк стенаһын нығытыу, Кооператив яланы биҫтәһендәге Туймазы урамын ремонтлау, Амантай урамы, 9 һәм 9/1 адресында йорттар араһындағы тротуарға өҫтәмә пандустар ҡуйыу, 7-се, 7/1, 9-сы, 9/1 йорттар территорияһында хәрәкәт итеү мөмкинлеге сикләнгән категория өсөн уңайлыҡтар булдырыу мәсьәләләрен күтәреп, ыңғай яуаптар алды.

балаһы менән урамдан килә, бала туңдырма һорай. Туңдырманың ҡабын әсә шулай уҡ тротуарға ырғытып китте. Быйыл июндә ямғырҙар норманан ике ярым тапҡырға күберәк яуҙы. Көслө тулҡын урамды "йыуып", ҡый-ғыпырҙы канализацияға төшөрә һәм, әлбиттә, ул тығыла.

**➔ Таҙартҡан урында түгел, бысратмаған урында таҙа, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Быны менән килешәһегеҙме, әллә, кеше күрмәгәндә үҙегеҙ ҙә урамға сүп-сар ташлап китеүҙән баш тартмайһығыҙмы?**

- Сүп-сарҙы тейешле урынға ташлағанда урам таҙараҡ булыр ине. Автобус туҡталыштарында махсус һауыттар ҡуйылған - пассажирҙар кәрәкмәгән билетты транспорттан сыҡҡан ыңғайы шунда һалыр өсөн бик ҡулай. Автобуста йөрөргә тура килгәндә билетымды кеҫәмә лә, сумкама ла һалмайым, ҡулымда тотам, унан сыҡҡас та ҡый һауытына ташлайым. Урамда сүп-сар ташларға башыма ла килгәне юҡ. Хәтеремдә, беренсе курста уҡып йөрөйбөҙ, әхирәтем Миңһылыу менән киноға китеп барабыҙ, ул ҡапыл ғына эйелде лә, тротуарҙа, нәҡ беҙҙең аяҡ аҫты тәңгәлендә ятҡан икмәк киҫәген алып, ситкә, ағас төбөнә алып барып һалды. Мин шунда әхирәтемә һоҡланып ҡараным, ә бит миңә лә ул бик матур өлгө күрһәтте. Ә бит хәҙер икмәк, ҡалас киҫәктәре аяҡ аҫтында тулып ята.

**➔ Барыһы ла кемделер ғәйепләй, улар өсөн кемдер барыһын да эшләргә тейеш һымаҡ, әйтерһең дә, һәр кем - бер гонаһһыҙ фәрештә, ысынбарлыҡта ҡала урамдарында ғына түгел, урмандарҙа, яландарҙа кеше артынан сүп-сар ҡала, тәбиғәтебеҙ сүплек ояһына әйләнә бара...**

- Ҡала урамдарын сүпләгән кеше урман-яланда ла, һыу буйында сүпләйҙер инде. Беҙ бала, йәш саҡта һыу буйына эсергә һыу, ашарға аҙыҡ алып йөрөмәнек. Хәҙерге пляждарҙа таң менән һепертке, тоҡ тотоп таҙартыусылар йөрөй. Телевизорҙан көнө-төнө, рустар әйтмешләй, "праздный образ жизни" тигәнде пропагандалай торғас, бала-саға, йәштәр, хатта өлкәндәр ҙә, эштән, уҡыуҙан бушаған арала һыу буйында шешлек ашап, һут, һыра, башҡа төрлө эсемлектәр эсеп, ял итеп ваҡыт үткәрә. Һыу инеү миҙгеле - һыуҙа йөҙөп, ҡояшта ҡыҙынып, тәбиғәттә булып, тән һәм йән өсөн ял итеү булһын ине лә бит. Ә бындай ялдың күңелгә йәмле, матур тойғолар биреүе икеле. Экологик тәрбиә биреү яғы аҡһай башланы, был ғаиләгә лә, мәктәпкә лә ҡағыла, тип уйлайым. Өйҙә ата-әсә өйрәтмәй, улар быны кәрәк тип тапмай. Дәрестәрҙә, класс сәғәттәрендә, хатта быйылғы Экология йылында ла был турала әңгәмәләр бөтөнләй алып барылмайҙыр, күрәһең...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ҺӨНӘРҘЕ ДӨРӨҪ ҺАЙЛА!



**Мәктәпте тамамлаусы йәштәр бөгөн һөнәр һайлау тигән ҙур һынау алдында тора. Ә бит киләсәгеңдең уңышлы булыу-булмауы үҙ ваҡытында дөрөҫ һөнәр һайлап, тормошта үҙ урыныңды табыуҙан да тора.**

Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты бына 25 йыл төрлө йүнәлештә эшләүсе юғары квалификациялы белгестәр әҙерләй. Бындағы белем биреү йүнәлештәре илдең иҡтисади хәлен, заман талаптарын иҫәпкә алып һайланған. Уҡыу йортонда ике профилле йүнәлеште ("Туған тел һәм әҙәбиәт өлкәһендә белем биреү", "Рус теле өлкәһендә белем биреү" һәм "Мәктәпкәсә белем биреү һәм башланғыс белем биреү" профилдәре) һайларға мөмкин. Был профилдәр буйынса биш йыл дауамында алған белем ике йүнәлештә лә эшләү мөмкинлеген бирә. Бынан тыш, беҙҙең уҡыу йортонда техник йүнәлештәр буйынса белем биреүгә лицензиялар бар. Мәҫәлән, "Транспорт һәм технологик машиналар һәм комплекстарҙы эксплуатациялау" йүнәлешендә ике профиль ҡаралған - "Автомобиль сервисы" һәм "Транспорт һәм технологик машиналар һәм ҡоролмалар сервисы (нефть һәм газ ятҡылыҡтарын табыу һәм эшкәртеү)". Был йүнәлештә уҡытыу өсөн институттың ныҡлы матди-техник базаһы, тау машиналары һәм ҡоролмалары полигоны бар.

Әйткәндәй, Сибайҙағы уҡыу йортонда икенсе юғары белем алыусы студенттарға түләүгә ташламалар ҡаралған. Күп студенттар көндөҙгө бүлектә бюджет нигеҙендә уңышлы уҡып, юғары академик стипендия ала һәм ситтән тороп уҡыуын үҙе түләй. Уҡып бөтөүгә улар ике диплом ала, был иһә эш табыу мөмкинлеген тағы ла арттыра. Беҙҙең уҡыу йортонда белемде дистанцион технологиялар ярҙамында алырға ла була. Был ситтән тороп уҡыусылар өсөн дә, үҙҙәренең квалификацияһын үҫтерергә теләүселәр өсөн дә, инвалид студенттар йәки һаулыҡтары буйынса мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн дә бик уңайлы. Институтты тамамлаусылар шулай уҡ белем алыуҙы магистратурала дауам итә ала.

Бөтә ил буйынса бюджет урындары кәмегән, уҡыу өсөн түләүҙәр артҡан осорҙа ла Сибай институты тотороҡло эшләүҙе дауам итә. Бюджет нигеҙендә уҡыған студенттар 4 меңдән алып 12-13 меңгә тиклемге стипендияға дәғүә итә ала. Уҡыу түләүле булған осраҡта ла студенттар өсөн матди ярҙам күрһәтеү программалары эшләп килә. Студенттар өсөн исемле стипендиялар, гранттар бар.

Сибай институтына уҡырға ҡабул итеү Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре нигеҙендә, айырым осраҡтарҙа уҡыу йорто билдәләгән һынауҙар аша алып барыла. Бынан тыш, урта махсус белемле студенттар ҙа һынау тота ала. Улар өсөн урында имтихан биреү, тест һорауҙарына яуап биреү, урта махсус уҡыу йорттарын тик "бишле"гә тамамлаусыларға өҫтәмә балдар ҡаралған. Абитуриенттарҙы ҡабул итеү барышында уларҙың төрлө олимпиадаларҙа, конкурстарҙа ҡатнашыуы һәм призлы урындар яулауы, шәхси уңыштары иҫәпкә алына.

**Азат ВӘЛИЕВ,**
**педагогия фәндәре докторы, профессор,**
**Сибай институты директоры вазифаһын башҡарыусы.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сабыртма

❖ Тире сабыртмаһынан кесерткән ярҙам итә. 2-3 ҡалаҡ кесерткән япрағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә. Сабыртмалы урындарға ошо төнәтмәгә манылған сылатҡыс һалырға.

## Ҡолаҡ шаулағанда

❖ 1 ус һуған ҡабығын ярты литр һыуҙа 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм көнө буйы һыу урынына эсергә. Бынан тыш, һуғандың эсен алып, уны аҡ әнис (тмин) орлоғо менән тултырырға, духовкала бешерергә, һуңынан һутын һығып алырға. 2-3 көн дауамында көнөнә 2 тапҡыр ҡолаҡтарға 2-3 тамсы тамыҙырға.

## Аяҡ табаны әсетһә

❖ Төнгөлөккә тоҙло ҡыярҙан сылатҡыс яһағыҙ.

## Тубыҡтар һыҙлаһа

❖ Тубыҡ быуындары һыҙлауынан, көҙән йыйырыуҙан дауа: 3 ҡалаҡ бөтнөк үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, ауыртҡан урындарға сылатҡыс яһарға.

## Ҡояшҡа аллергия

❖ 7 йәш әрем ботағын һауытҡа һалып, яртыһына тиклем спирт ҡойорға, ҡараңғы урында 3 көн төнәтергә. Мамыҡ менән проблемалы урындарға һөртөргә. Сөйәл үләне төнәтмәһе менән ванналар инергә.

## Сандыр бүҫере

❖ Сандыр бүҫере (паховая грыжа) яфалаһа, литрлы банканың яртыһына тиклем күгүлән (спорыш) тултырырға, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға. 2 аҙна төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Баш шаулаһа

❖ 2-3 балғалаҡ ҡыҙыл клевер сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20-30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Бына, мәсәлән, һарыҡ тәкәһе. Был мал боронғо телебеҙҙә ҡусҡар тип аталған. Һарыҡ - ҡуй, тәкә - ҡусҡар, яңы тыуған һарыҡ бәрәсе - ҡошанай (ҡосанай), 6 айға тиклемге бәрәсе - ҡуҙы, 6 айҙы үткән йәш һарыҡ - туҡлы.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Тәүге мосолмандар

Мөхәммәт бәйғәмбәр бер ҡасан да Ҡөрьәндең авторлығына дәғүә итмәй. Киреһенсә, Ҡөрьән Алла тарафынан булдырылыуы, ә Мөхәммәт үҙе - Ҡөрьәнде кешеләргә еткереү өсөн һайлап алынған кеше булыуы ғына тураһында белдерә.

Тәүге асылыштары тураһында Мөхәммәт Хәҙисә менән Вараканан башҡа береһенә лә әйтмәй. Аҙаҡтанылраҡ иң яҡын, иң ышанырлы кешеләре араһында вәғәзләй башлай. Иң тәүге булып Ислам динен Хәҙисә ҡабул итә. Хәҙисәнән һуң - Ғәли менән Зәйед.

Ул саҡта ун-ун биш йәшлек үҫмер Ғәлиҙең Исламды ҡабул итеүе ошолай була: бер тапҡыр ул Мөхәммәт абзыһы менән Хәҙисә еңгәһенең быға тиклем уға таныш булмаған рәүештә доға ҡылыуын күреп ҡала.

- Һеҙ нимә эшләнегеҙ ул? - тип һорай Ғәли, намаҙ тамамланғандан һуң.

-Беҙ ысын, берҙән-бер Аллаға доға ҡылдыҡ. Был - Ислам диненең төп ҡанундарының береһе. Ислам иһә бәйғәмбәрҙәр аша Алла тарафынан ебәрелгән дин. Уны һин дә ҡабул ит, - тип яуап бирә Мөхәммәт.

- Быңдай дин тураһында бер ҡасан да ишеткәнем булманы. Атайым менән кәңәшләшмәйенсә, бер ни тип тә әйтә алмайым, - тип яуап бирә Ғәли.

- Атайыңа әлегә бер ни тип тә өндәшмә. Исламды ҡабул итмәгән осраҡта ла ошо һөйләшеү тураһында башҡа бер кемгә лә өндәшмә, - ти Мөхәммәт.

Ғәли өндәшмәҫкә һүҙ бирә. Ә икенсе көн таң менән килә лә, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән Ислам ҡанундары тураһында һораша башлай. Мөхәммәт аңлатҡандан һуң шунда уҡ Ислам динен ҡабул итә.

Хәҙер инде был йортта йәшәүсе туғандар араһынан тик Фатима менән Варака ғына мосолман булмай. Фатимаға биш кенә йәш була ә, Варака иһә насрани өммәтендә - христиан динендә була. Мөхәммәт фекеренсә, насрани өммәт, йәһүҙиҙәр кеүек үк, Алла тарафынан Изге китап ебәрелгән өммәттәргә ҡарай. Шуға ла был өммәттәгеләр, Алла тарафынан күрһәтелгән юлдан барып, үҙ бурыстарын үтәй. Ҡөрьән иһә мәжүсиҙәр һәм дөрөҫ юлдан тайпылыусылар өсөн ебәрелә.

Ғәли атаһына бер ни өндәшмәһә лә, Әбү Талиб бер көн Мәккәнән алыҫ булмаған урында намаҙ башҡарып ултырған Мөхәммәт менән улын күреп ҡала.

- Ниндәй сәйер доға ҡылаһығыҙ? - тип һорай ул.

Мөхәммәт уға ла Исламдың ҡанундарын аңлата һәм мосолман булырға өгөтләй. Хашим нәҫеленең башлығы Әбү Талиб Мөхәммәтте иғтибар менән тыңлай, улына мосолман динен тоторға рөхсәт итә, үҙе иһә ата-бабаларының диненән ваз кисеүҙән ҡырҡа баш тарта. Аҡыллы һәм тәжрибәле кеше булараҡ, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең вәғәзләүе ниндәй ауырлыҡтар тыуҙырасағын да алдан уҡ һиҙемләй.

- Ярҙам кәрәкһә, мөрәжәғәт ит. Берәйһе рәнйетһә, туғандарың барыһы ла һине яҡлашыр, - ти ул Мөхәммәт бәйғәмбәргә, бер аҙ уйланғандан һуң.

Әбү Талибтың был һүҙҙәренән һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр вәғәз эшмәкәрлеген киңерәк йәйелдереп ебәрә.

**(Дауамы бар).**

*ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ*

**Сит ил университеттарында белем алыу - заманыбыҙҙың киң таралған күренеше. Бигерәк тә сит тел өйрәнгәндә уны ошо телдә һөйләшкән илдәрҙә камиллаштырыу дөрөҫ, тип иҫәпләй бөгөнгө әңгәмәсебеҙ. Өфө ҡыҙы Физәлиә ҒАРИПОВА бөгөнгө көндә Тегеран дәүләт университетында фарсы телен өйрәнә.**

# ТЕЛДӘР БЕЛГӘН - ИЛДӘР БЕЛГӘН



**➔ Телдәр белгән - илдәр белгән, ти халыҡ, белем артынан сит ерҙәргә китеү борондан хупланған. Телдәр өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу һиндә ҡайҙан?**

- Төрлө телдәр белеү башҡорт халҡына ят күренеш түгел. Борон бигерәк тә ғәрәп, фарсы телдәрендә уҡый-яҙа белеү ғәҙәти хәл булған. Тел ғилеменә электән ҡыҙыҡһыныуым булды. Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын тамамлағас, инглиз телен һайлармынмы икән тип тә уйлағайным. Тик инглиз телен башҡа тел өйрәнгәндә бер юлы камиллаштырырға була хәҙер. Етмәһә, миңә шәреҡ мәҙәниәте ҡыҙығыраҡ тойолдо һәм мин Санкт-Петербург дәүләт университетының шәреҡ факультетына уҡырға индем. Иран һәм Афғанстан тарихы кафедраһында тарих йүнәлешендә белем алдым. Башҡорт милләте өсөн был университет ниндәйҙер кимәлдә изге урын да, факультеттың эске ихатаһында билдәле башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлидиҙең бюсы тора, уның исемен йөрөткән Төрки тикшеренеүҙәр үҙәге эшләй.

Бында уҡыған саҡта уҡ Иранға практикаға - Сит ил студенттары институтына барырға тура килде. Әлеге көндә мин Ирандың иң ҙур һәм иң боронғо уҡыу йортонда - Тегеран дәүләт университетының магистратураһында уҡыйым. Фарсы телен һәм әҙәбиәтен ныҡлап өйрәнәм. Башҡорт теленең лексик составында фарсы һүҙҙәре күп, шуға ла миңә баштан уҡ фарсы телен өйрәнеүе еңелерәк булды.

Башҡорт, рус теленән тыш, фарсы, дари, пашто, ғәрәп, инглиз телдәрен беләм. Фарсы теле Ирандың дәүләт теле генә түгел, урта быуаттарҙа Алғы, Урта һәм Көньяҡ Азия халыҡтары өсөн аралашыу теле лә булған, классик һәм хәҙерге әҙәбиәте бик бай. Фарсы телендә 80 миллиондан ашыу кеше һөйләшә. Дари телендә һөйләше үселәрҙең дөйөм һаны 15 миллион тирәһе. Пашто телендә 30 миллион кеше һөйләшә. Был Урта Көнсығыш ерҙәре - Иран менән Афғанстан Урта диңгеҙҙең көнсығышы, Көнбайыш Азия, Көньяҡ Азия, Алыҫ Көнсығыш араһындағы тарихи күпер иҫәпләнә. Ебәк юлы улар аша үтә. Быңа ошондай ҡыҙыҡлы донъя һәм мәҙәниәттәр минең алдымда асыла.

**➔ Бөгөнгө көндә бөтөн донъя көнсығышҡа йөҙө менән боролған мәлдә фарсы теле белгестәре ысынлап та ҙур һорау менән файҙалана. Шулай ҙа республикаға эшкә ҡайтыу теләге бармы?**

- Иран, Афғанстан, Ҡытай дәүләттәре менән сәйәси һәм иҡтисади бәйләнештәр нығына. Һөнәр һайлағанда ниндәй йүнәлештә эшләйәсәгем тураһында уйланмай ҙа инем. Хәҙер тәржемәсе һөнәре күберәк ҡыҙыҡһындыра. Санкт-Петербург университетын тамамлағас, Мәскәү менән Иран араһында сауҙа бәйләнештәре буйынса эшләргә саҡырғайнылар, артабан уҡырға теләгем булғас, баш тарттым. Уҡып бөткәс, ошондай йүнәлеште һайлармын, моғайын. Үкенескә күрә, республикала был йәһәттән эш табасағыма шикләнәм, шулай ҙа киләсәктә үҙ халҡыма файҙалы булырға теләр инем. Бәлки, архивтарҙа ла эшләргә, фарсы телендәге материалдарҙы тәржемә итергә тура килер, кем белә?

**➔ Сит мәҙәниәттәр менән осрашҡанда уларҙы башҡорт милли үҙенсәлектәре менән сағыштыраһыңмы?**

- Ирандар ҡунаҡсыл, асыҡ күңелле халыҡ кеүек тойола. Ҡунаҡҡа кил, тиҙәр икән, әле һине ҡунаҡҡа саҡыралар тигән һүҙ түгел, быны һиңә ишетеүе күңелле булһын өсөн генә әйтәләр. Такси саҡырып, был хеҙмәттәре өсөн аҡса бирһәң, башта "Кәрәкмәй", тиҙәр. Өс тапҡыр баш тартҡандан һуң, дүртенсеһенә генә алалар. Сауҙа нөктәләрендә лә шулай, һатыусы башта аҡсанан баш тарта. Ә түләмәй сығып китһәң, артыңдан йүгерәләр. Төркиәлә, Афғанстанда быңдай күренеш юҡ, ул Иранға ғына хас. Йәғни, мәҙәниәттәре шулай. Башта аптырап ҡалаһың, аҙаҡтан быға өйрәнәһең. Тегеран замансараҡ ҡала, унда яулыҡты ла замансараҡ, ҡыланыбыраҡ ябыналар. Бөтөн архитектура өлгөләре Машхад кеүек боронғо ҡалаларҙа. Унда ҡатын-ҡыҙҙар урамда чадор кейеп йөрөй. Ғөмүмән, чадор - мосолман донъяһында шунда уҡ Иранды хәтерләтәлер, моғайын. Яулыҡһыҙ булһаң, урамда бабайҙар килеп һуғып китергә лә мөмкин. Ураҙа ваҡытында рестарандар, кафелар көндөҙ ябыҡ була, һыу ҙа һатып алып булмай. Ризыҡ порцияларын мул итеп һалалар, итле аштарға, һарыҡ итенә өҫтөнлөк бирәләр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҡыл - ҡаҙна, күңел - йоҙаҡ, тел асҡыс, ти халыҡ мәҡәле. Тел белгәнгә бөтөн донъя үҙ ишектәрен асыуын ата-бабаларыбыҙ ҙа белгән борон, йәштәребеҙ ҙә аңлай быны бөгөн. Белем алырға Ҡытайға булһа ла бар, тимәҫтәр ине, юғиһә. Кешелек капиталы ла мөһим милли иҡтисад үҫешендә, бары тик быңдай йәштәребеҙгә үҙҙәренең белемен һәм һәләтен ҡулланырға мөмкинлектәр генә булһын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ*

# ЮҒАЛҒАН ҺҮҘҘӘР ЭҘЕНӘН




**Башҡорт теле бик бай һәм һығылмалы. Телебеҙҙең нескәлектәре лә күп. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙе хатта рус йәки башҡа телдәргә тәржемә итеп, уларҙың мәғәнәһен тулы ғына итеп аңлатып та булмай. Әммә шул уҡ ваҡытта телебеҙ юғалтыуҙар ҙа кисергән. Телмәребеҙҙән төшөп ҡалған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе, атамаларҙы барлап алйыҡ әле.**

Быңа, мәҫәлән, һарыҡ тәкәһе. Был мал боронғо телебеҙҙә ҡусҡар тип аталған. Һарыҡ - ҡуй, тәкә - ҡусҡар, яңы тыуған һарыҡ бәрәсе - ҡошанай (ҡосанай), 6 айға тиклемге бәрәсе - ҡуҙы, 6 айҙы үткән йәш һарыҡ - туҡлы. Ә инде көйҙөрөлгән тәкәне бурыҡ тигәндәр. Төплө һәм матур атамалар, шулай бит.

Бурыҡ тигәнде ололар ауыҙынан ишеткәнем булды, әммә нимә икәнлеген аңламағанмын икән. Ә ул һүҙ көйҙөрөп һимертеүгә ҡуйылған һарыҡ тәкәһен аңлатҡан. Шулай уҡ бәләкәйҙән "һарыҡтарға ҡошандарын ҡуштым" тигәнде лә иҫләйем. Бында һарыҡтарға йәш бәрәстәрен имеҙеүгә ҡушыу хаҡында һүҙ бара.

Һыйыр малына күскәндә, беҙ бөгөн үгеҙҙең барыһын да үгеҙ ти ҙә ҡуябыҙ. Ә асылда үгеҙ - ул көйҙөрөлгән мал атамаһы. Тоҡомон ҡалдыра торған үгеҙ ул - буға. Шулай уҡ һыйыр малында ла быҙау, башмаҡ, тананан тыш, 1 йыллыҡтан үткән малды ҡонажын тиҙәр. Йылҡыны ғына түгел, һыйыр малында ла бар икән был атама. Йәғни, был уның йәшен белдерә. Шулай уҡ тана тигәнде лә бөгөн йәш һыйыр тип аңлайбыҙ. Ысынында, 6 айлыҡтан 1 йәшкә тиклемге мал тана була икән.

Унан килә һабантурғайы тигән ҡош атамаһын алайыҡ. Ҡоштоң ысын исеме - буҙтурғай. Буҙлыҡ - ул буръянлы

*✓ "Ырымбурҙа дәүләт ҡоролошо эштәре менән мәшғүл булдыҡ. Бының менән хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов менән профессор Ҡулаев шөғөлләнде", - тип яҙа Зәки Вәлиди. Ошо осорҙа Хәлим Әмиров Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алына.*



УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

# ХӘЛИМ ӘМИРОВ



**Автономия өсөн көрәштең башында торған эшмәкәрҙәрҙең күбеһен әле белеп бөтмәйбеҙ, үкенескә ҡаршы. Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Зәки Валиди менән иңгә-иң терәп, Башҡортостан мөхтәриәтен булдырыуҙа фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән шәхестәрҙең күбеһе 30-сы йылдарҙа Сталин репрессияһы ҡорбаны булып, уларҙың яҡты исемдәре нисәмә тиҫтә йылдарға онотолоуға дусар булды. Ошондай шәхестәрҙең береһе Хәлим Насретдин улы Әмиров тураһында һүҙебеҙ.**

Уның исеме архив документтарында йыш осрай. Бигерәк тә ул 1919-1920 йылдарҙа башҡорт ғәскәрҙәренең сәйәси етәкселәренең береһе булараҡ танылыу ала. Әйткәндәй, Хәлим Әмиров төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең береһе. Ул 1894 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең Уран ырыуы башҡорттарына ҡараған Яңы Уртауыл ауылында (бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының Яңауыл районы) тыуған. Бөгөн ҡайһы берәүҙәр Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында татарҙар ғына йәшәй һәм 1922 йылда Өфө губернаһы бөтөрөлгәс, был территория Башҡортостанға түгел, ә Татарстанға ҡушылырға тейеш булған, тигән уйҙырма тарата. Ә бына ошо төбәктән сыҡҡан башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәрҙәре Шәйехзада Бабич (сығышы Мишкә районынан), Муллаян Халиҡов (Бүздәк районынан), Хәлим Әмиров (Яңауыл районынан), Илдархан Мутин һәм Искәндәрбәк Солтанов (Татарстандың Аҡтаныш районынан) был фекерҙең уйлап сығарылған уйҙырма икәнен ап-асыҡ күрһәтеп тора. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ла автономия өсөн көрәштә әүҙем ҡатнашҡан һәм үҙҙәре төйәк иткән ерҙәрҙе Башҡортостан автономияһы составында күрергә теләгән.

Архив документтарынан күренеүенсә, Хәлим Әмиров Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылда ҡушылған. Әммә 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙарында Бөрө өйәҙе башҡорттарынан делегат булараҡ ҡатнашҡан. Билдәле булыуынса, 1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте үҙенең эшен яңынан башлай. Август башында Ырымбурға ҡайтып, Каруанһарай бинаһында урынлаша. Ырымбурға ҡайтыу менән Башҡорт хөкүмәте автономияның урындағы идара органдары эшен йәнләндереү менән шөғөлләнә башлай. "Ырымбурға килеп етер-етмәҫтән дәүләт ҡоролошо эштәре менән мәшғүл булдыҡ. Бының менән хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов менән профессор Ҡулаев шөғөлләнде", - тип яҙа Зәки Вәлиди. Ошо осорҙа Хәлим Әмиров Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алына. Уны хөкүмәттең Мәғариф бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары - кантон башҡармалары янындағы мәғариф бүлектәрен ойоштороу, мәғариф эшен яйға һалыу менән шөғөлләнә ул.

Әммә чехословактар күтәрелешенән һуң килгән хөрриәт заман 1918 йылдың көҙөнә әкренләп юҡҡа сыға башлай. Демократик ҡараашта булған һәм Башҡортостан автономияһына ыңғай ҡараған Һамар хөкүмәте ҡыҙылдар ҡыҫымына сыҙай алмай, Өфөгә сигенә. 1918 йылдың сентябрь аҙағына Өфөлә ойошторолған Ваҡытлы Бөтә Рәсәй хөкүмәте тиҙҙән Омскиға күсә. Бында ул монархистик ҡараашлы генералдар йоғонтоһона эләгә һәм улар ҡушыуы буйынса өлкә һәм милли хөкүмәт ғәскәрҙәрен бөтөрөү яғын ҡайыра башлай.

Башҡорт хөкүмәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә сыҡҡан форсат менән файҙаланып өлгөрә. Алты полктан торған Башҡорт ғәскәрен ойоштора һәм урындағы автономия органдарын нығыта. 1918 йылдың ноябрендә Омскийҙа адмирал Колчак власты үҙ ҡулына ала. Ул тәү сиратта Башҡорт хөкүмәтен һәм ғәскәрҙәрен юҡ итергә ниәтләй. Әммә ярайһы уҡ көс туплап алған Башҡортостан автономияһы диктатор Колчактың бойороҡтарына буйһонмай. Киреһенсә, 1918 йылдың аҙағында фронтҡа таралған полктарын бер йоҙроҡҡа туплауға өлгәшә. Аҡтар яғында автономияға өмөтөн өҙгән башҡорттар советтар менән бәйләнешкә инеп, килешеү төҙөргә ниәтләй. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте советтар яғына сығырға тигән ҡарар ҡыла. Тап ошо мәлдә, башҡорт халҡының яҙмышы, Башҡортостан дәүләтселегенә өсөн һынылышлы осорҙа Хәлим Әмиров үҙен ялҡынлы оратор һәм абруйлы эшмәкәр итеп күрһәтә. 1919 йылдың 16 февралендә ул Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыу тураһындағы фарманын иғлан итеү өсөн Башҡорт корпусы штабының махсус вәкиле сифатында Таналыҡ-Баймаҡ заводына (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) ебәрелә. Бындай эш һалдаттар һәм халыҡ алдында абруйы булған, ҡатмарлы, боларыш ваҡытында Башҡорт хөкүмәтенең ҡарарын кешеләргә еткерә алырлыҡ вәкилдәргә генә йөкмәтелә. Х. Әмиров үҙенә йөкмәтелгән бурысты уңышлы атҡарып сыға. Халыҡ большевиктар менән ярашыуҙы хуплай.

Ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң бер-нисә көн үткәс, 21 февраль көнө Темәс ауылында 1-се Башҡорт хәрби ҡоролтайы үтә. Әмиров ҡоролтайҙа әүҙем ҡатнаша, йыйылған һалдаттар - съезд делегаттары алдында сығыш яһай, советтар менән килешеү Башҡортостан автономияһы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булыуын аңлата. Съезда Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте (Башревком) ойошторола. Хәлим Әмиров тәжрибәле мәғариф эшмәкәре булараҡ Башревкомдың Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп һайлана. Әммә Башҡортостан территорияһында һуғыш барған осорҙа, милли мәғариф мәсьәләләре генә түгел, автономия идараһын ойоштороу ҙа ҙур ҡыйынлыҡтарға осрай. 1919 йылдың мартында ҡыҙылдарҙы аҡтар ҡыҫа башлағас, Башревком Темәс ауылынан Мораҡҡа (хәҙерге Күгәрсен районы) күсергә мәжбүр була, артабан Иманғол ауылына (хәҙерге Ырымбур өлкәһендә), һуңынан Тоцкий ҡасабаһына барып урынлаша.

**(Дауамы бар).**

---

...сыбыҡ-селек араһы. Турғай шул селеклектә оялай. Шунлыҡтан ул буҙтурғай тип аталған.

"Ҡыҫҡаяҡ" тигән һүҙҙе боронғо йыр тексында уҡып аңламағайныҡ. Бер йырсы тотоп килгән ине был йырҙы. Текста, күрәһең, һуғышҡа китергә сыҡҡан яугирҙы оҙатыу мәле һүрәтләнә. Яугир ауыҙынан шундай һүҙҙәр сыға: ҡыҫҡаяғым сыҡты ла оҙатып. "Ниндәй ҡыҫҡаяҡ оҙатырға мөмкин ир кешене?" тип аптырашабыҙ хәҙер. Балалары микән, тип уйлайбыҙ. Күптән түгел бер нуғай шиғырында уҡыным шул һүҙҙе, унда ла "ҡыҫҡаяҡтар" бар. Һүҙлектәрен ҡараһам, бот саптым, ҡатынды шулай тигәндәр икән. Аңлатмаһы ла бар: ҡатындың алыҫҡа юл тотмауын, ғүмере бары тик йорт-ҡура тирәһендә генә үтеүен белдерә был атама.

Һөйләү телмәрендә "лағырлама" тигән һүҙ бар. Беҙ уны кәрәкмәгән нәмәне күп һөйләгән кешегә ҡарата ҡулланабыҙ. Йәнәһе, юҡты һөйләмә йәки күп һөйләмә, тигән мәғәнәлә. Асылда, был һүҙ үҙе үк һөйләшеү тигәнде аңлата икән. Тура мәғәнәлә. Лағырлау - һөйләшеү. Мәҫәлән, әйҙә лағырлап алайыҡ әле, тигәндең бер ғәйебе лә юҡ.

"Урал батыр" эпосында меңйәшәр ҡарттың Уралға әйткәндәрендә ошондай юлдар бар: "Донъя ул бер баҡ икән..." Йәғни, донъя ул бер баҡса икән. Был да беҙҙәге юғалған һүҙҙәрҙең береһе, тип иҫәпләйем. Сөнки ул ҡайһы бер туғандаш халыҡтар телендә һаҡланып ҡалған. Был һүҙ беҙҙә "са" ялғауы ҡушылып, үҙгәреп киткән.

"Ирҙең бәйеле аҙһа, бәлә килә" тигән әйтемдәге бәйел һүҙен күптәр аңламайҙыр. Был теләк, аппетит тигәнде аңлата. Йәғни, ир кешенең теләктәре ҙурайып, ул шашып, холоҡһоҙланып китһә - аҙағы яҡшы бөтмәйәсәк, тигән киҫәтеү төшөнсәһе был. Ололар ауыҙынан "бәйеленде тый" тигәнде лә ишетергә мөмкин.

"Асманға ашыу" тигән һүҙ бар. Тарихтан Бөйөк Асман империяһы тигәнде уҡыныҡ. Усман тигән кеше исеме, ауылдар атамалары бар. Был иһә космосты аңлата. Космос ул - асман. Бөгөн ул йыһан тигән һүҙ менән дә алмашынған, әммә иң боронғо һүҙебеҙ - асман.

Ошолай тәҫләп барлай башлаһаң, заман бөгәрҙәрендә юғалып, онотолоп ҡалған һүҙҙәр күп икән. Уларҙың мәғәнәләре йәшәй, ә үҙҙәре юҡ. Юғалтмаҫҡа ине шуларҙы, улар бит беҙҙең туған тел байлығы.

Кемдәр тағы ниндәй һүҙҙәр белә? Хәтерләйек, яңыртайыҡ иҫте, барлайыҡ һүҙҙәребеҙҙе.

**Милүшә ХӘБИЛОВА.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Бәшәнәк-ҡаңлылар

Бәшәнәктәр - уғыҙ һәм ҡоман ҡәбиләләренә туған. Улар башҡорттарҙың әйле, төркмән, көҙәй һ.б. ырыуҙары менән бәйле (Р.Кузеев, "Археология и этнография Башкирии", 4т., Өфө, Башкнигоиздат, 1971, 237-238-се биттәр). Мәхмүт Ҡашғари үҙенең "Диван лөғәт әт төрк" хеҙмәтендә 24 уғыҙ ҡәбиләһен килтерә, уларҙың 19 ҡәбиләһе бәшәнәктәрҙе тәшкил иткән.Һары ҡыпсаҡтар (половецтар) килгәс, бәшәнәк берләшмәһенең бер өлөшө уларға ҡушыла.

Уҙдар Европала Ҡоман йәки Половецтар тип аталған урҙаның көслө ырыуының береһе һаналған, улар көнсығыштан ҡуҙғалып ҡәбиләләштәренең еренә дәғүә белдерә башлаған. Шуға күрә ҡайһы бәшәнәк олоҫтары Дунайға күсенергә мәжбүр булған. 1064 йылдың сентябрендә уҙдар Дунайға килгән. Уларҙың һаны 600 мең кешегә барып еткән. Дунай тигеҙлеге уларҙың ҡул аҫтына күскән. Урҙаның бер өлөшө көньяҡ-көнбайышҡа киткән. Бәшәнәктәр менән уҙдар артынан һары ҡыпсаҡтар (половецтар) ҡуҙғалған. Уларҙың биләмәһе хаҡында Плано Карпини яҙып ҡалдырған: "ҡомандар иле аша 4 йылға: Днепр, Дон, Волга, Яйыҡ аға..." (70-се бит). 1321 йылда Әбелфәҙи үҙенең географик трактатын тамамлай. Был хеҙмәтендә ул башҡорттар иленең сиктәре хаҡында һүҙ алып барғанда, уҙдар "хазарҙар менән болғарҙар (дөрөҫөрәге, башҡорттар, тип төҙәтә автор) араһында йәшәй..." тип белдерә.

### Һары ҡыпсаҡтар - половецтар

Көнсығыштан көнсығыш Европа далаларына табан ағылған тулҡын "һары ҡыпсаҡтар" (половецтар) тип аталған. Был тулҡын үҙенән алдағы икәүҙән көслөрәк булған. Һары ҡыпсаҡтар ханы Һырған ҡыпсаҡ халҡын Русь сигенә тиклем алып килә. Уларҙың үҙенсәлекле ораны "Ура" булған. Ул ҡыпсаҡ теленән "туҡма", "йәнен ҡый", "уратып ал" тигәнде аңлатҡан. Урта быуатта йәшәүсе инглиз тарихсыһы Дт. Флетчер ҡыпсаҡ яугирҙары хаҡында шулай яҙған: "Үлемде шул тиклем күрәлмайҙар, дошманынан еңелеүҙән үлемде өҫтөн күрәләр, әгәр ҙә еңелеп, һуғыша алмаҫлыҡ, үҙ-үҙенә ярҙам итә алмаҫлыҡ хәлдә ҡалһалар, ҡоралдарын кимерәләр. Европала уларҙы төрлөсә атап йөрөтәләр: половцы, plaic, balwen или Wolwen, Cumani, cuni, ҡыпсаҡтар. Төрлө сығанаҡтарҙа бер үк халыҡ хаҡында һүҙ бара, тип билдәләй Петр Голубовский. Н.М.Карамзин "Олег осоронда" половецтар хаҡында белмәгәндәр, тип яҙа. Төрки телдә "половец" атамаһы булмаған, "ҡыпсаҡ" тип атағандар уларҙы. Инглиз тарихсыһы боронғо заманда "по" һүҙе "халыҡ" тигәнде аңлатҡан, шулай булғас "половец" атамаһы "халыҡ аулаусы" тигәнде аңлата тип белдерә.

**(Дауамы бар).**

✓ **2015 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республиканың 14,3 миллион ер фондынан 84,3 мең гектар ғына, йәғни 0,59 проценты Башҡортостан милке булараҡ теркәлгән, шул уҡ ваҡытта 41,6 процент - федераль милектә.**



Ер реформаһын

# ИКМӘК ҺОРАНЫП СЫҠМАҪ

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - ғалим-агроном, юрист, бойондороҡһоҙ бизнес баһалаусы, көрсөккә ҡаршы идарасы, ер кадастры инженеры. Үткән быуаттың 70-90-сы йылдарында колхоз бригадиры, агроном, колхоз рәйесе, район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары, КПСС райкомының икенсе секретары, район хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләп, ауыл хужалығы, ер проблемаларын кабинетта ултырып түгел, үҙ күҙҙәре менән күреп белгән кеше. Шулай итеп, ауыл хужалығы мәсьәләләре буйынса ғына ла әллә күпме һөнәргә эйә, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Ғарифулла ЯПАРОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Һеҙҙе нығыраҡ белгән һайын яңынан-яңы һөнәрҙәрегеҙ асыла бара. Үҙегеҙҙе етмеш төрлө һөнәр эйәһе тип әйтер инегеҙме?**

- Мин Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, ике тиҫтә самаһы йыл уҙғас донъяға килһәм дә, ауылдағы донъя мәшәҡәттәрен, колхоз-совхоз эштәрен үҙ елкәмдә татыған кешемен. Ул саҡта бит атай иҫән булмаһа, йә һуғыштан ауыр яраланып ҡайтһа, йә хеҙмәт инвалиды булып, физик эш эшләргә хәленән килмәһә, балалар, йәш-елкенсәк, үҫмерҙәр тормоштоң ауыр йөгөн төптән егелеп тартты. Шуға ла ауылда кәрәкле барлыҡ һөнәрҙәрҙе лә эшләй беләм, тип ышаныслы әйтә алам. Бала саҡта ағайҙарға эйәреп, төрткө ауларға ла, һалабаш һыҙырырға ла йөрөнөм, мурҙа үреп, мурҙа һалып, балыҡ та тоттом, урман да таҙартырға тура килде. Шуға, урманда ниндәй ашарға яраҡлы үлән бар, ҡош-ҡортто нисек ауларға, нисек тамаҡ йүнәтергә икәнен дә беләм. Колхоз-совхозда минең йәштәштәр бәләкәстән яландарҙа күбә тартты-ҙы, силос һалырға йөрөнө. Быны маҡтаныу тип ҡабул итмәһен гәзит уҡыусы, әммә беҙҙең быуын кешеләре кеше йәшәмәгән утрауҙа ла үҙ йүнен күреүҙең нигеҙҙәрен белеп, тәжрибә туплап үҫте.

**Быгаса Ғарифула Япаровты күптәр фән эшмәкәре тип белһә, былтыр күптәрҙе аптыратып, "Китап" нәшриәтендә "Тәҡдир" тип аталған төрлө жанрҙағы әҙәби һәм документаль әҫәрҙәр йыйынтығығыҙ донъя күрҙе. Әҙәбиәткә ынтылыш ҡайҙан килә?**

- Биш йәшемдән уҡырға өйрәндем, сөнки өйҙә һәр ваҡыт китап төп урында булды, ғаиләләге 10 баланың бишеһе һәр ваҡыт мәктәп уҡыусыһы ине - береһе унынсы синыфты тамамлаһа, кемелер беренсе класҡа барҙы. Күп балалы ғаиләбеҙҙә һәр ваҡыт "Совет Башҡортостаны", "Ленинсе" гәзиттәрен, "Пионер", "Ағиҙел" журналдарын алдырҙылар. Ауыр йылдар булһа ла атай-әсәй беҙҙе рухи аҙыҡтан әҙмәне. Икенсенән, вазифа буйынса ла, көрсөккә ҡаршы идарасы булып эшләгәндә лә ил буйлап күп йөрөргә тура килде. Бигерәк тә Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Киров һәм башҡа өлкәләрҙә. Хатта иртәнге ашты Ырымбурҙа ашаһам, киске ашҡа Свердловскийҙа була торғайным, ә инде таңды Ҡаҙанда ҡаршылай инем. Шуға күрә, күргән-кисергәндәр, китап итеп яҙаһы тарихтар бик күп, тик әлегә ваҡыт яғы ҡыҫынҡы. Шулай ҙа былтыр, тәүәккәлләп, "Тәҡдир" тигән китап сығарҙым. Унда "Ҡыйралыш" тигән романда республиканың ауыл хужалығы нисек итеп 70-се йылдарҙа үргә күтәрелеп, 1990 - 2000 йылдарҙа көрсөккә батҡаны һүрәтләнә. Шулай уҡ повесть һәм хикәйәләрҙә һәр беребеҙҙә хас шуҡ малай саҡтары, шаян үҫмер ваҡытты сағылдырҙым. Китапты уҡыусы күптәр әҫәрҙәрҙәге геройҙарҙа үҙҙәрен танып, минең шуҡлыҡтарҙы ҡайҙан беләһең, тип аптырап шылтырата. Шуныһы бигерәк ҡыҙыҡ.



**Ысынлап та, "Ҡыйралыш" роман-дилогияһы илдең аграр секторының фажиғәнен сағылдыра... Көрсөккә ҡаршы идарасы булараҡ, дөрөҫөн генә әйтегеҙ әле, аграр реформа башлағанда ауыл хужалығын һаҡлап алып ҡалыу мөмкин инеме?**

- Мөмкин ине, әлбиттә, сөнки заманында шәхсән үҙем Учалы районының "Байрамғол агрофирмаһы" яуаплылығы сикләнгән ширкәтте банкротлыҡ процедураһы башланғандан һуң, уны һаҡлап алып ҡалыу өсөн күп көс һалдым. Хәҙер унда малсылыҡ өсөн заманса технологиялар һәм техник база бар, 2 миллиард һум самаһына мегаферма төҙөлдө. Был үҙе үк банкротлыҡ институтының һөҙөмтәлелеген һәм шундай программа булырға тейешлеген, район хакимиәттәре менән көрсөккә ҡаршы идарасының бер төптән эшләргә тейешлеген раҫлай.

Икенсе ыңғай миҫал - Әбйәлил районының "Красная Башкирия" ауыл хужалығы кооперативында производство базаһын һәм эш урындарын һаҡлап ҡалыу. Һөҙөмтәлә бөгөн унда йөшелсә, картуф үҫтереү, бөртөклө һәм мал аҙығы культураларын эшкәртеү өсөн сит ил техникаһынан ҡеүәтле база туплалған.

Көрсөккә ҡаршы идарасы булған осорҙа Башҡортостанда ғына түгел, күрше өлкәләрҙә лә ҡайһы бер өмөтһөҙ тип һаналған ауыл хужалығы предприятиеларын һаҡлап ҡалыуға өлгәшенде, хәҙер улар малсылыҡ, баҡсасылыҡ буйынса алдынғы хужалыҡтарҙан иҫәпләнә. Дөйөм алғанда, Рәсәй буйынса 100-ҙән артыҡ заводта, комбинатта, холдинг компанияларында, колхоздарында һәм совхоздарында көрсөккә ҡаршы көрәшеп, шуларҙың күпселеге һаҡлап алып ҡалынды.

Шуға күрә, республикала бөгөн дә муниципаль берәмектәр үҙҙәре көрсөккә ҡаршы идарасы булдырыу тәжрибәһен индерергә, Хөкүмәт патронажы аҫтында эш менән шөғөлләнгән белгестәр, ғалимдар, эре предприятиелар һәм ойошмалар етәкселәре иҫәбенән көрсөккә ҡаршы менеджерҙар әҙерләргә тейеш, тип ышаныслы итеп әйтә алам. Артабан был эшмәкәрлек хакимиәт хеҙмәткәрҙәренең һанын һыҡҡартыуға, аппаратты тотоу сығымдарын кәметеүгә, муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙең яуаплылығын арттырыуға, аппарат уйындарын һәм интригаларын бөтөрөүгә килтерәсәк.

**Ә бына тотош Рәсәй көрсөккә терәлгәндә был проблеманы нисек хәл итергә була, сөнки йыл һайын иҡтисади көрсөк бөттө, хәҙер яҡшы йәшәй башларбыҙ, тигән вәғәҙәләр бирелә, әммә тормош раҫлауынса, көрсөк, ғәҙәттә, тиҫтә йылға тиклем һуҙылыусан һәм шул күҙлектән ҡарағанда, уның 2022-2023 йылдарға тиклем дауам итеүе ихтимал...**

- Телһә ниндәй дәүләттең йәшәү сығанағы булып ер ресурстары һәм унда йәшәүсе халыҡ тора. Кеше ерҙә тыуа, ерҙә йәшәй һәм эшләй, балалар үҫтерә, вафат булғас, ошо ергә ерләнә. Илде ер ресурстары менән тәьмин итеү һәм уларҙы һөҙөмтәле файҙаланыу - йәмғиәт производствоһын үҫтереүҙең мөһим иҡтисади һәм сәйәси факторы. Баҙар мөнәсәбәттәренең донъялағы тәжрибәһе күрһәтеүенсә, барлыҡ үҫешкән илдәрҙә лә ер иҡтисади мөнәсәбәттәргә ышанаслы, бөтмәҫ һәм һан яғынан артып тороусы, барлыҡ кимәлдәге бюджеттарҙы тулыландырыусы, территорияларҙың үҫешен һәм йәмғиәттең социаль тотороҡлолоғон тәьмин итеүсе финанс сығанағы тип баһалана.

Бөгөн, ерҙең кемдеке булыуы - файҙаланып, елеген һурып, ташлап китеүсенекеме, әллә уны һаҡларға һәм уңдырышлылығын арттырып, тейешле уңыш алырға тырышыусы ысын хужаныҡыммы - тураһындағы мәсьәлә сиселмәй тороп, Рәсәйҙең ауыл хужалығындағы бер генә проблема ла хәл ителмәйәсәк. Был мәсьәлә ил баҙарын сит ил тауарҙарына биреп, ерҙең тарихи хужаһынан азат итеүсе дәүләт бюрократияһының башбаштаҡлығы һөҙөмтәһендә крәҫтиәндең генә түгел, Рәсәйҙең яҙмышын уңҡын алдына килтереп ҡуйҙы. Азыҡ-түлекте ситтән индергәндә дәүләт чиновниктары кесәһенә аҡҡан "откат", ил продукттары күләмен кәметеп, ситтән индереүгә өҫтөнлөк биреүгә юл асты. Совет заманында коллектив ерҙәрҙе эшкәрткән, ә хәҙер формаль рәүештә ере булһа ла, бер нәмәһеҙ ҡалған крәҫтиәндең хәл-торошон тағы ла ҡатмарлаштырҙы. Хатта бөгөн пай ерҙәрен алыусылар ҙа уны бер нәмә лә эшләтә алмай, тимәк, ерҙән килем килмәй. Рәсәй тарихында бындай абсурдтың булғаны юҡ ине әле. Ғәмәлдә, дәүләт аграр өлкәне көрсөккә үҙе алып барып терәне. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың ер тураһындағы ҡануниәтенә ентекле анализ яһамай ғына шулай тиергә мөмкин: үҙ законадары буйынса йәшәгән бюрократия крәҫтиәнлекте һәм уның ергә бәйлелеген тулыһынса юҡҡа сығармаҫтан алда, төплө һәм уйланылған яңы аграр реформа үткәрергә кәрәк. Ул, бәлки, масштабы буйынса крепостнойлыҡ хоҡуғын бөтөрөүгә һәм Столыпин реформаһына тиң булыр. Тик ул 90-сы йылдарҙа башланған аграр реформанан айырылып торорға тейеш!

**Ысынлап та, пайҙарҙы бүлеп биреү Чубайстың үҙ заманындағы хосусилаштырыу чектары кеүек булды - ҡағыҙ бар, әммә уны нимә эшләтергә икәнен бөрөү ҙә белмәне һәм улар акциялар сифатында байҙарҙың активына инеп ятты. Ер менән дә шул уҡ хәл - пай ерҙәре бар, әммә улар хужаһына теркәлмәгән, йә актив түгел, йәғни, килем килтермәй. Бындай күренеште Башҡортостан буйынса нисек баһалайһығыҙ?**

- 2015 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республиканың 14,3 миллион ер фондынан 84,3 мең гектар ғына, йәғни 0,59 проценты Башҡортостан милке булараҡ теркәлгән, шул уҡ ваҡытта 41,6 процент, йәғни 6 миллион гектар - федераль милектә. Муниципаль һәм республика милкендә ерҙең 1 проценты ғына. Граждандар милкендә 2 252 700 гектар ер бар, предприятиеларҙа - 3900 гектар. Республиканың 307 мең граждандары 1 972 000 гектарҙы үҙ милкенә күсергән. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, 5 763 000 гектар (40,3 процент) ергә хоҡуҡтар сикләнмәгән. Һуңғы ике йылда ошо һандарҙа артыҡ үҙгәрештәр юҡ. Был эш буйынса башҡа төбәктәр менән сағыштырыу беҙҙең файҙаға түгел. Йәғни ерҙең хужаһы юҡ икән, бюджетка ла аҡса инмәй. Ә 4-6 гектар пайы булған кеше уны үҙ аллы ғына эшкәртә лә, унан килем дә ала алмай. Шуға күрә, Рәсәй аграр секторҙы үҫтереү стратегияһы ер эшкәртеүселәрҙең, пай хужаларының кооперацияларын үҫтереүҙе мотлаҡ дәүләттең ярҙамын күҙаллай. Ауыл ерҙәрендә бәләкәй һәм урта тауар етештереүселәргә ярҙам итеүҙе, уларҙың продукцияһын ҡулланыусылар һәм һатыу ойошмалары аша һатып алыуҙы, техника һәм ауыл хужалығы машиналарын оҙайлы ваҡытҡа лизинг нигеҙендә биреүҙе, ауыл халҡына үҙ эшен асыу өсөн түләй алырҙай кредит биреүҙе ойоштторорға кәрәк. Быныҡ өсөн, элекке әңгәмәләремдә әйткәнемсә, Ер банкы булдырыу зарур. Ул ерҙә эшләүселәр өсөн 25 йылға кредит бирәп, уны 25 йылдан һуң, ныҡлап аяҡҡа баҫҡас ҡына ҡайтара башлауҙы күҙаллай. Рәсәй тарихында бындай миҫал бар һәм ул үҙенең хаҡ икәнен раҫлай.

✓ *Илдең төп ресурсы булған ерҙе уны эшкәртә алмаған граждандарға биреү илде һуңғы нөктәгә килтереп еткерәсәк. Ерҙең яңы хужалары иң яҡшы ерҙәрҙе алып ҡалып, баҫыуҙарҙы - деградацияланыуға, ә ауылдарҙы үлеүгә дусар итәсәк.*



# ӨСӨН...

## яңынан үткәрергә кәрәк!

**Башҡортостан милкендәге ер күләме 1 процент та юҡ тип аптыраттығыҙ... Ә бит дәүләтселек тәүшарттарының береһе булып тап ер тора. Дәүләтебеҙ - Башҡортостан, дәүләт символдарыбыҙ булған гербыбыҙ, гимныбыҙ, флагыбыҙ бар, ә еребеҙ юҡ килеп сығамы инде? Йәғни, ул формаль рәүештә бар, ә фактик рәүештә, йәғни документтар буйынса - юҡ...**

- Бөтөн бәлә лә шунда - формаль рәүештә генә. Ә бына донъя тарихынан Ватиканды алып ҡарағыҙ. Үҙенең ере булыуы арҡаһында ул Рим территорияһы эсендә анклав-дәүләт булып тора, үҙ аллы йәшәй. Беҙ, киреһенсә, заманында йәйрәп ятҡан территорияһы булған башҡорттар, бөгөн ерһеҙбеҙ. Быға тиклем яңы Рәсәйҙә алып барылған ер реформаһы үҙенең нигеҙһеҙлеген раҫланы. Илдең төп ресурсы булған ерҙе уны эшкәртә алмаған йәки эшкәртергә теләмәгән граждандарға биреү илде һуңғы нөктәгә килтереп еткерәсәк. Ерҙең яңы хужалары - "яңы байҙар" иң яҡшы ерҙәрҙе алып ҡалып, баҫыуҙарҙы - деградацияланыуға, ә ауылдарҙы үлеүгә дусар итәсәк.

Әлбиттә, ер реформаһынан тулыһынса баш тартып, элекке ер ҡоролошона кире ҡайтырға ярамай. Кешелек тарихы ергә шәхси милекселектең һөҙөмтәле булыуын раҫланы һәм был дәлилде бер нисек тә инҡар итеп булмай. Бөтөнләй ерһеҙ тороп ҡалмаҫ өсөн ауыл хужалығы ерҙәрен ҡабат элекке торошона, йәғни дәүләт милкенә күсерергә кәрәк. Бының өсөн ерҙең сифаты, дәүмәленә һ.б. ҡарамайынса, бер өлөш өсөн билдәле хаҡ ҡуйып, халыҡтан һатып алырға кәрәк. Мин ҡабат Рәсәй Ер банкыһы темаһына урап ҡайтам, сөнки был эште шунан башҡа йырып сығып булмай. Был осраҡта ер профессиональ кимәлдә хужалыҡ алып барған субъекттарға ғына бирелер, алыпһатарҙар ҡулына күсмәҫ. Ә дәүләт, ер ресурстарының милексеһе булараҡ, ауыл хужалығы производствоһына дәүләт кредит ресурстары иҫәбенән төрлөсә ярҙам күрһәтергә тырышыр ине. Әгәр бөгөн ошондай реформа үткәрмәһәк, тиҙҙән Рәсәй, иң ҙур ер территорияһы булған ил, донъя буйлап тағы икмәк һоранып сығасаҡ.

**Ер буйынса белгес булараҡ, бөгөнгө хәл-тороштан сығыу өсөн нимәләр тәҡдим итәһегеҙ?**

- Беренсенән, фермерҙарға ерҙе хосусилаштырыу һәм хужалыҡ эсендәге ер ҡоролошона тулы комплект документтар алыу өсөн 300 мең һум күләмендә кредит биреү зарур. Икенсенән, күп балалы ғаиләләргә шәхси хужалыҡ алып барыу өсөн ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәренән кәрәк булған тиклем участкалар бирергә һәм уларға техника, яҡшы орлоҡ, тоҡомло мал алыу өсөн дәүләт ярҙамы күрһәтергә. Өсөнсөнән, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүселәргә 100 гектар урманды оҙайлы ҡуртымға, майҙаны 50 гектарҙан да кәм булмаған яландарҙы льготалы шарттарҙа күсмә умарталыҡ өсөн бирергә, лизингка транспорт саралары бүлергә. Дүртенсенән, Хөкүмәт ҡанаты аҫтында кредит кооперативы формаһы буйынса Республика крәҫтиән банкы ойоштороорға. Бишенсенән, район хакимиәттәрендә ер мәсьәләләре, шул иҫәптән бюджет иҫәбенә ер ҡоролошо һәм уның зыянһыҙ эшләүе мәсьәләләре буйынса бушлай юридик консультациялар булдырырға. Алтынсынан, ер - республиканың бик ҡиммәтле һәм иң әһәмиәтле социаль-иҡтисади ҡеүәте булараҡ, уның менән аныҡ орган шөғөлләнергә тейеш. Республиканың бөгөнгө Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығы, тармаҡ министрлыҡтары яуаплылыҡты үҙҙәренә алмай һәм алырға теләмәй бер-береһенә һылтанғанда, алға китеш булмаясаҡ. Мин бындай орган республика ер фондына хужаларса эйә булыу, уны файҙаланыу һәм уның менән идара итеү кеүек милексе функцияларын үтәргә, туранан-тура Башҡортостан Башлығына буйһонорға, халыҡ алдында мотлаҡ йыл һайын Башҡортостанда ерҙе һаҡлау һәм һөҙөмтәле ҡулланыу буйынса отчет бирергә тейеш, тип күҙаллайым. Етенсенән, тотош Рәсәй Федерацияһында ер мөнәсәбәттәрен тамырынан үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Халыҡтың алдынғы ҡарашлы өлөшө һәм ғалимдар илде аграр реформа ярҙамында нисек итеп көрсөктән сығарыу буйынса аныҡ тәҡдимдәр индерә башланы һәм уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалырға ваҡыт!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"... Күк йөҙөндә йондоҙҙар мәңгелек йыһан киңлегендә сабыша, был ярышта ҡайһыһылыр тиҙ янып, шунда уҡ юҡ була. Уларҙың барлығын, юҡлығын башҡалар тоймай ҙа шикелле. Тик улар бәғзеләрҙең урынын алып, бер файҙаһыҙ ваҡыт үткәрәлер һәм эҙһеҙ юғалалар..." - тип яҙа үҙенең "Сабышҡан йондоҙҙар" повесында Ғарифулла Хәбибулла улы. Уның иһә күк йөҙөндәге йондоҙҙар араһында үҙенә генә тәғәйен урыны бар, ул бер ваҡытта ла кеше урынын алып тормаған һәм тормай, бөгөн дә тормош ҡараңғылығында ҡайһы һуҡмаҡтан барырға белмәй ҡаңғырыусыларға юл яҡтыртырға тырыша...**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

*КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ*

# АТҠА...

## аттай кеше кәрәк



**Баймаҡ районы Темәс ауылында Шәйхетдин ХӨСӘЙЕНОВ исемле ҡымыҙсы йәшәй. Шәйхетдин Шәрәфетдин улы инде тиҫтә йылдан ашыу үҙенең йылҡы өйөрөнә ауылдаштары йылҡыларын ҡушып, Ирәндек итәгендә тибендә ҡышлата, йәйен Урал армыттарында йәйләтә. Ул ауылдаштарын эш урындары менән дә, шифалы таҙа милли эсемлек менән дә тәьмин итеп, үҙе әйтмешләй, күңел кинәнесе ала. "Көн күргән, йүн биргән, килем килтергән ғаилә шөғөлөбөҙ ул - йылҡысылыҡ", - ти әңгәмәсебеҙ. Әйткәндәй, был мәҡәләлә һүҙ башлыса йылҡысылыҡ тураһында барасаҡ, шуға күрә, гәзит уҡыусы ошо - ҡымыҙлы, кейек ҡош-ҡортло, урман-таулы, сатлама һыуыҡлы, томра эҫеле өлкәгә башкөллө сумғандай булыр, тип ышанабыҙ.**

**Шәйхетдин Шәрәфетдин улы, йылҡысылыҡ бала саҡтан таныш шөғөлмө?**

-Мин 1964 йылда Иҫәнбәт ауылында тыуғанмын. Миңә бер йәш тигәндә ғаиләбеҙ Темәскә күскән. Атай ғүмере буйы совхозда малсы булып эшләне. Мин йәйҙәрен атайға йылҡы көтөштөм, бәйгеләрҙә атта сабыштым. Баймаҡ һөнәрселек училищеһында тракторсы-машинист һөнәрен үҙләштерҙем, әммә тракторҙа эшләргә тура килмәне. "Тимер ат" күңелгә ятманы - тере атты яҡыныраҡ күрҙем. Урта мәктәпте тамамланым да, малсылыҡ эшенә сумдым.

Төрлө яҙмаларҙа боронғо башҡорттарҙың ир балаларҙы 2 йәшенән һыбай йөрөргә өйрәтеүе тураһында әйтелә. Сабый сағынан бала нимә араһында үҫә, шуға күнегә инде ул. Зөлфиә еңгәйең менән арыҫландай ике ул тәрбиәләйбеҙ. Өлкәнебеҙ Радик былтыр ғына Ватан алдындағы бурысын үтәп ҡайтты, әле ситтә эшләй. Йәйге осорҙа миңә ярҙамлаша. Бала сағында ул да бәйгеләрҙә ал бирмәне, район бәйгеһендә еңеүе өсөн алған һыуытҡыстуңдырғысты бөгөн дә файҙаланабыҙ. Ансар - 7-сене тамамлаған кинйә улыбыҙ - шулай уҡ, бәйгелә ҡатнашам, тип, ағаһынан күрмәксе, ат әҙерләп йөрөй әле. Улдарыма: "Ғүмер буйы таш сығарып, ағас бысып, кешегә бил бөгөп йәшәп булмай, үҙ көсөгөҙ менән йәшәгеҙ", - тим. Уландарға дәғүә юҡ - үҙҙәре белеп, ат менәләр, һорап та тормайҙар. Беҙ уларҙы, атай өйрәткәнсә, үҙ өлгөбөҙҙә тәрбиәләргә тырышабыҙ.

**Ҡымыҙсылыҡҡа нисек тотоноп киттегеҙ? Тәүҙә мал үрсетеү мәсьәләһен хәл иткәнһегеҙҙер...**

- Ҡымыҙҙы һатыуға сығарырлыҡ күләмдә етештереү өсөн 1-2 бейәң булыуы ғына аҙ. Беҙҙең эшкә уңышлы ғына тотоноп китеүебеҙҙең сәбәбе тибен күренешенә һәм ауылдаштарыбыҙ менән хеҙмәттәшлегебеҙгә барып ялғана. Тәүҙә минең 1 генә бейәм бар ине. Хәҙер иһә, 10 тирәһе. 2000 йылдар урталарына тиклем мин совхоздың йылҡы малын көттөм. Совхоз бөтөрөлгәс, ауыл халҡының йылҡыһын көтөүгә күстем. Йылҡы көтөүе, ғәҙәттә, яҙҙан көҙгә тиклемге осорға ғына иҫәпләнә. Ә беҙ уны ҡыш миҙгелендә лә көтә башланыҡ. Башҡорт тоҡомло аттарҙың тибенгә яраҡлы булыуы, Ирәндектә ҡарҙың йоҡалығы беҙҙең был ниәтебеҙҙе тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итте. Ауылдаштар менән яҙылмаған килешеү шарты буйынса, мин бер өйөр йылҡыны Ирәндектә имен ҡышлатыу, йәйҙе имен йәйләтеүҙе тәьмин итәм, ә мал эйәләре ҡышҡы осорҙа бер башҡа айына 350 һум күләмендә миңә хаҡ түләй. Яҙҙан көҙгәсә көтөү улар өсөн бушлай, ул миҙгелдә мин бейә малдарын һауып, ҡымыҙ бешеп, уны һатыу хоҡуғына эйә булам. Ауылдаштарҙы бындай хеҙмәттәшлек бик ҡәнәғәтләндерҙе. Ни тиһәң дә, йылҡыға бесәнде элекке һымаҡ күп әҙерләү мәшәҡәтенән, иркен йөрөгән малдарына ҡош-ҡорт тейеүе хәүефенән арынды улар. Унан бигерәк, һарайҙа ҡышлаған мал менән ҡырҙа ҡышлаған мал араһында айырма һиҙелеп тора: тибен малы көрөрәк тә, мыҡтыраҡ та була. Шулай итеп, эште йәнләндереп тә ебәрҙек. Уралда ҡар ҡалын булғанлыҡтан, ул тибенгә бармай. Ҡышҡылыҡҡа Ирәндеккә, тау баштарына юллапнабыҙ. Март, февраль бөткәнсе йылҡыны ҡырҙа көтәбеҙ. Бейәләр еленләй башлаһа, малҡайҙарҙы бер айға хужаларына таратып бирәбеҙ. Унан апрель баштарында тағы ҡырға сығабыҙ. Шуның менән көн күрәбеҙ. Бөтөн ризығыбыҙ ҙа, аҡса ла малдан, ҡымыҙҙан килә.

Эште нисек башлауыбыҙ тураһында һүҙҙе дауам итәйем. 2005 йылда булһа кәрәк, Темәс ауылы биләмәһе башлығы Рауил Хөрмәт улы Йәнсурин беҙгә Сәксәй ауылы эргәһенән көтөүлек ер бүлдереп: "Шунда мал көтөгөҙ, бейә һауып, ҡымыҙ бешегеҙ", - тине. Шулай итеп, беҙ ҡымыҙ йорто эшләнек, бейә һауырға кәртә ураттыҡ, үҙебеҙ йәшәргә торлаҡ эшләнек. Ҡымыҙҙы әсәйебеҙҙән өйрәнгән рецепт буйынса бешәбеҙ. Уның ҡымыҙы бик тәмле була торғайны заманында. Сифатлы ҡымыҙ бешәм тиһәң, был эшкә бар күңелеңде һалырға тура килә. Илке-һалҡылыҡты яратмай был эш. Ни тиһәң дә, ризыҡ бит, көнкүреш тауары түгел. Һаумалға, ҡур менән бергә сейә япрағы һалабыҙ. Ҡымыҙҙан сейә тәме килеүенә ауылдаштар өйрәнеп тә бөткән. Ҡайһы саҡта сейә япраҡтары һалынмаған ҡымыҙ эләкһә, улар хатта дәғүәһен дә белдерә. Кеше яратып эсһен тиһәң, ҡымыҙҙы оҙаҡ итеп әҙерләргә кәрәк, шунһыҙ, булмай.

**Тауарҙы етештергәс, уны ҡулланыусыға еткереү тәртибен дә көйләмәй булмайҙыр?**

- Магазин-фәләнебеҙ юҡ. Ауылда ҡымыҙ эшләүселәрҙең күбәйеүе, конкурентлыҡ арҡаһында ҡымыҙ етештереү күләмен көнөнә 50 литрҙан арттырып булмай. Ҡымыҙҙы, башлыса, оло юл сатында һатабыҙ, кемдер беҙҙең өйҙән килеп тә ала. Бөгөн күптәр ауылда финанс ҡытлығы кисерә. Һуңғы аҡсаларын тотоп, бер һыуһын ҡымыҙ эсергә, тип килеүселәр осрай. Ундайҙарҙы, аҡсағыҙ тулмай, тип, кире бороп сығарып ебәреп, йә ҡымыҙҙы еткермәй ҡойоп булмай бит. Беҙҙең өсөн ҡымыҙҙың сифатлы булыуы һәм ауылдаштарыбыҙҙың ризалығы мөһим. Тағы, балалар сифатлы, тәбиғи эсемлек эсһен, тибеҙ. Минән ҡайһы берҙә: "Балыҡсы, ғәҙәттә, балыҡтан туя, умартасы - балдан бүгә... Ә ҡымыҙсы ҡымыҙҙан туямы икән?" - тип һорайҙар. "Әллә, - тип яуап бирәм ундай саҡта, - ҡымыҙ ялҡыта торған нәмә түгел бит, һыу һымаҡ итеп, эсәһең дә йөрөйһөң уны". Ҡымыҙҙы йыл әйләнәһенә эсер өсөн йәш, сөсө ҡымыҙ ҡойолған шешәләрҙе көҙ көнө туңдырғысҡа һалып ҡуябыҙ ҙа, ҡышҡы оҙон кистәрҙә иретеп эсәбеҙ. Әйткәндәй, туңдырып иретелгән ҡымыҙ икенсе тапҡыр туңдырыуға бармай - таты китә.

**Һеҙҙең эш яуаплы ла, хәүефле лә икәне көн кеүек асыҡ. Бүре, айыу-маҙар ҙа йонсоталыр?**

- Ҡош-ҡорт теймәһен өсөн өйөргә һәр ваҡыт күҙ-ҡолаҡ булаһың инде. Төнгөлөккә ауыл эргәһенә яҡынлайбыҙ, малды ҡураға бикләйбеҙ. Юғиһә, ҡолондарҙы айыу, һеләүһен, бүре ашарға әҙер генә тора. Йыл һайын 1-2 баш йылҡыны айыу-бүрегә "биреп" торабыҙ инде. Былтыр ҙа ҙур ғына бер бейәне айыу ашаны...

**Әгәр мин ҡолондар һатып алып, уларҙы үҫтереп, ҡымыҙ бешергә теләһәм, килтереп сығара аламмы?**

- Барыһы ла үҙеңдән тора инде. Боронғолар "Атҡа аттай кеше кәрәк", тигән. Бейәне, һыйыр һымаҡ күреп, алып ҡайттың да, һауҙың түгел шул. Йылҡы, бер сығып китһә, 40-50 километр араны уйламай ҙа үтергә мөмкин. Йыбандың икән, йылҡыңды икенсе кешеләр "ҡарай". Ат ҡараҡтары күп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай тәүәккәл, аттай ағай йәшәй Баймаҡ районы Темәс ауылында. Уның миҫалынан ҡымыҙ бешеү өсөн үҙеңдең бер өйөр йылҡың булыуы төп шарт та түгел икәнлеген аңланыҡ. Баймаҡ, Әбйәлил яҡтарында булһағыҙ, шул яҡтың сейәле ҡылған ҡымыҙын ауыҙ итегеҙ әле.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмәләште.

Башмаҡ ҙурлыҡ овчарка аҫтындағыға аптырап ҡараны. Иркә тауышҡа ҡолаҡтарын беҙ итеп, баштарын ҡыйшайтҡыланы. Унан көслө тәпәйҙәре менән ерҙәгенең күкрәгеп бер-ике иҙеп тапағас, һауаға ҡарап "был ни булды әле" тигәндәй юғалып ҡалған тауыш менән бер генә "һау" итте лә, әсиренең эргәһенә һуҙылып төшөп ятты. Һаҡсылар килеп еткәндә улар шулай йәнәш яталар ине. Ҡанға туҙған ҡатынға ярҙамға ташланған һалдаттар, был күренештән күҙҙәре дүрт булып, йәһәтләп килеп эткә ҡайыш һалдылар ҙа, торорлоҡ хәле ҡалмаған Хәтирәне тартып торғоҙҙолар. Ҡатын-ҡыҙҙар ярҙамы менән саҡ ҡайтып етте ул. Ҡурҡыу быуынына төшкән ине.

Шул ваҡиғанан һуң ниндәйҙер званиелы ҡатын янына алып килделәр. Ул баштан-аяҡ күҙҙән үткәргәс, һорау бирҙе:

- Ни өсөн һине теге көн эт ботарламаны, нисек уйлайһың?

Хәтирә уйлап торманы, үҙенә мәғлүм булғанын ғына әйтте:

- Мине эттәр ярата, уларға тылсымым бар.

- Нисек, тылсымың? Ведьмамын, тимәксеһеңме? - ир төҫөнә инеп барған ҡатын тәмәкенән һарғайған тешен күрһәтеп йылмайҙы.

- Бәләкәйҙән шулай, мин иң уҫал этте лә тиҙ генә эйәләштерә алам. Атайым бүре балалары ла алып ҡайтып биргеләне...

Тыңлаусы ышандымы-ышанманымы, һынаулы ҡарай биреп торғас, шул уҡ уйынсаҡ тауыш менән ҡарар сығарҙы:

- Бөгөндән эт фермаһына күсәһең. - Унан үҙ алдына һөйләнгәндәй итеп өҫтәп ҡуйҙы: - Ҡайһы ваҡыт кешеләр менән йәшәгәнсе, эттәр менән көн итеү хәйерле ул.

Шулай итеп, эттәр араһына барып инде Хәтирә. Уларға ашарға бешерҙе, ситлектәрен таҙартты, көсөкләтте, тейешлеләрен тейешлеләренә ҡушты, йәштәрен, ауырлыҡтарын билдәләп барҙы. Ауырығандарына ветеринар саҡыртты, бетлеләрен махсус шыйыҡсалар менен йыуҙы, яралыларын тәрбиәләне. Үҙе ошо хайуанҡайҙарына, улары уға шул ҡәҙәр булып эҫенделәр, ҡатындың эттәр тотолған территорияға килеп инеүе булды, тегеләре ситлектәренә ырғыны, иректә йөрөгән көсөктәр сабышып килеп юлын быуҙы. Һәр береһенә йылы һүҙ ҡатырға, ҡараш һалырға тырышты, улар бит шул һөйөүгә мохтаж булып көтөп тора, тип уйланы.

Бер оя көсөктәре менән мәж килеп ултырғанда, һаҡсы янына килде.

- Ошо ояны ал да, минең менән юллан.

Артыҡ һорау биреп тороу тыйыла, ҡатын йәһәт кенә көсөктәрҙе кәрзингә тултырҙы ла, алаҡанлап артынан эйәргән әсәләренә: "Хәҙер киләбеҙ",- тип, йөк машинаһына менеп тә ултырҙы. Ҡаланың төрлө урамдары буйлап бара торғас, ситкә үк сығып китеп, ике ҡатлы шәхси йорт янына туҡтанылар. Янындағы ҡоралды һалдат ергә һикерҙе лә, ынтылып, кәрзинде алды. Эйәртенешеп ихатаға барып инделәр. Бында ла хәрби һаҡ тора икән. Бейек болдор эргәһенә килеп етеүҙәре булды, эстән сыр-сыу килеп ике бала йүгерешеп сыҡты.

- Көсөктәр! Көсөктәр килде!

- Даша, мин һайлайым! Атай миңә һайларға рөхсәт итте!

- Мин үҙемә, һин үҙеңә! Һәр кем үҙе һайлай!

Арттарынан сыҡҡан әсәләре өтәләнә:




- Балалар! Бер генә көсөк алабыҙ! Берәү генә.

Алты-ете йәштәрҙәге малай менән ҡыҙ берәүҙе лә ишетерлек хәлдә түгелдәр, кәрзиндәге алты көсөктө лә ҡосаҡтарына һыйҙырырға тырышып, ойпалай торғас, уларҙың барыһы ла сиҙәмгә төшөп йүгерешә башланы. Урам эсе балалар һәм көсөктәр әйлән-бәйләненә әүерелде. Хәтирә менән һаҡсы йылмайып ҡарап тик торҙо. Бындай илаһилыҡты уларҙың күптән күргәне лә юҡ бит. Балаларҙың әсәһе араларында сәбәләнде:

- Даша! Миша! Ыҙалатмағыҙ көсөктәрҙе! Улар шундай уҡ бәпестәр.

- Даша! Һин апай кеше бит!

Шул саҡ Хәтирәне ток һуҡҡандай булды. Ҡатын ҡыҙына ап-асыҡ итеп татарса өндәште. Татарса! Хәтирә, тулҡынланыуҙан күҙҙәренә йәш алып, башҡортса яуапланы:

- Уйнаһындар аҙыраҡ, барыһы ла балалар бит.

Һомғол буйлы ап-аҡ ҡына ҡатынҡай "йәлп" боролоп ҡарап алды. Унан йылмая биреп янына килде. Хәтирә лә уға йылмайҙы.

- Һин татар ҡыҙымы?

- Башҡорт ҡыҙы.

Икеһе лә йылмайышты. Ҡатын башлап ҡулын һуҙҙы:

- Ғәлимә. Бында Галина Тимофеевна тиҙәр.

- Хәтирә.

- Ҡайҙан һин, Хәтирә?

- Башҡортостандан.

- Мин Миңзәлә ҡалаһында йәшәнем... ҡасандыр. Мин... Черновтың ҡатыны булам.

Хәтирәнең аптырауы йөҙөнә сыҡты, күрәһең, Ғәлимә көлөп үк ебәрҙе. Черновты уны, кем белмәй! Ул бит... төрмә начальнигы!

- Күптән бындаһыңмы? - Яңы танышы билдәһеҙ яҡҡа эйәген ҡаҡты, әммә һорау аңлашылды.

- Ике йыл.

- Аңлашылды, - ҡатын, ошоноң менән һөйләшеү тамам тигәндәй, ҡарашын балаларына күсерҙе. - Балалар, бер көсөк алабыҙ ҙа, башҡаларын кәрзингә тултырабыҙ!

Оло ғауға, күҙ йәштәренә барып етеп, көсөк һайланғас, китер алдынан Хәтирә хужаларға баш һелкете:

- Һау булығыҙ, Ғәлимә.

- Имен бул, Хәтирә.

* * *

Тағы ла ике айҙан, төрмә начальнигының бойороғо буйынса уны көсөк алып барған йортҡа баҡса ҡараусы итеп күсерҙеләр. Был ваҡиғалар ағышына ул әле ошонда ер соҡоп йөрөгәнендә лә ышана алманы. Баҡса эштәренән тыш, һаҡсы күҙәтеүе аҫтында хужаның ҡоралдар музейында ла тәртип тотто. Төрлө ҙурлыҡтағы һәм ауырлыҡтағы пистолет-мылтыҡтарҙы таҙартты, майланы, бәрхәт менән ышҡып ялтыратты. Бушыраҡ ваҡытында Ғәлимә уны парк булып йәйелгән баҡсала бергә йөрөп әйләнергә саҡырҙы. Ике мосолман ҡатыны береһе татарса, икенсеһе башҡортса һөйләшеп кинәнде. Тора-бара был ҡатын уға асылып уҡ китә башланы. Ғәлимәнең атаһы медицина өлкәһендә академик булған. Әсәһе лә уҡымышлы ханым булып, ике ҡыҙын матур китаптар тәрбиәһендә генә үҫтергән. Ҡатындың үҙен тотошо, һөйләше, ҡылыҡтары барыһы ла уның ысынлап та юғары мәҙәниәтле ғаилә балаһы икәнен әйтеп тора ине. Ә был донъяла ул, әйтерһең дә, ваҡытлыса ғына. Әйтерһең, яңылышып ҡына килеп сыҡҡан. Был ерҙеке, был йәмғиәттеке түгел ул. Бысраҡ ергә баҫмаған, бынау оҙон күкһыу күлдәге, киң ҡырлы эшләпәһе, моңһоу ҡарашы, нескә йөҙһыны менән һауанан төшкән дә, осоп ҡына шылып йөрөгәндәй.

Ғәлимәнең атаһын "халыҡ дошманы" мөһөрө аҫтында атҡандар, әсәһе лә Себер һөрөлөп, шунан үле хәбәре килгән. Апаһы менән үҙе лә төрмә михнәттәрен татыған. Үҙен, ул ваҡыттағы чекист Черновтың күҙе төшөп, ул тамуҡтан һөйрәп сығарған һәм исем-фамилияһын алмаштыртып, был яҡтарға алып сығып киткән. Иренә ҡарата бер хисе булмаһа ла, яҙмышына күнгән ҡатын. Үҙенән күпкә оло булған кешенең бары тик яҡлауын ғына ҡабул иткән.

- Аңлайһыңмы, Хәтирә, мин ҡайһы ваҡыт үҙемде шундай күрә алмайым. Мин бит ҡурҡтым ул мәл, ысынлап, ҡурҡтым да ҡуйҙым.

- Аптырамайым. Беренсе тапҡыр ҡулға алынғанда мин дә ҡурҡтым, һорау алғанда ла, төрмәгә барып ингәндә лә, ней үле, ней тере түгел инем.

- Ә мин һындым. Мин атайым, әсәйем, апайым кеүек була алманым. Яҡлау эҙләнем, Алексей Петровичҡа ла, хатта йөҙөнә лә күтәрелеп ҡарамайынса биреллем һәм бөтә шарттарына ла риза булдым. Ә башҡа осраҡта бит мин уның кеүек кешегә боролоп та ҡарамаҫ, хатта һөйләшеп тә тормаҫ инем. Ундай кешегә сығыуымды белһәләр, атай-әсәйемдең йөрәге ярылыр ине...

Хәтирә әхирәтенә йәлләп ҡарап алды, тик йыуатыр һүҙ тапманы.

- Апайың ҡайҙа хәҙер? - тип һораған булды ахырҙа.

- Белмәйем, - Ғәлимә ауыр көрһөндө, - хатта белешә лә алмайым. Мин бит туғандарымдан, хатта ата-әсәмдән баш тарттым. Ишетәһеңме? Динемдән, исемемдән баш тарттым. Бына шундай кеше мин...

- Ә кем алдында баш тарттың?

- Ҡағыҙҙарҙа... Алексей Петрович алдында.

- Күңелеңдән юймағанһың да һуң.

- Юҡ, уныһын эшләп булмай. Күпме генә тырышһам да, булманы.

- Тимәк, һин уларҙан баш тартмағанһың. Хоҙай барыһын да күреп тора. Һинең сараһыҙҙан башҡарғандарыңды ул ғәфү итә.

- Хоҙай?.. - Ғәлимә баҫалҡы көлөмһөрәне. - Беҙ Хоҙайға ышанабыҙмы ни? Бар тип уйлайһыңмы һин уны, Хәтирә? Ерендә шундай хәлдәр ҡылынырға рөхсәт итер инеме икән ул, ысынлап булһа? Ә, Хәтирә?..

Хәтирәнең үҙенең дә был һорауҙы үҙенә йөҙәр ҡат биреп ҡарағаны булғас, был хаҡта ятһа ла, торһа ла уйланғас, һығымтаһын әйтте:

- Әгәр Хоҙай булмаһа, беҙ барыбыҙ ҙа улар кеүек кешеләр булыр инек. Ошо һынауҙарҙы үтһәк, ул беҙҙе ярлыҡар...

- Минең хәҙер бер нәмәгә лә ышанысым ҡалманы, Хәтирә. Мин хатта балаларымды ла тәрбиәләмәйем. Был донъяла, бындай йәмғиәттә һәм беҙҙеке кеүек яһалма ғаиләлә улар ниндәй булып үҫһендәр инде?

- Улай тимә, Ғәлимә. Ярай, һинең уларың бар, исмаһам, әүрәйһең шуларға.

- Инде бер нәмәгә лә әүрәй ҙә алмайым. Һүнеп барам мин яйлап... Быны Чернов та һиҙә.

Ысынлап, майшәм һымаҡ һыҙылып ҡына бысҡыған әхирәтен төрлөсә яйға һалырға, төшөнкөлөккә бирелмәҫкә өндәне, уның иғтибарын яуларлыҡ нимәләрҙер уйлап табырға тырышты Хәтирә. Бер көн хатта башына бәлә алып та ҡуйҙы. Тотто ла, мине рус теленә өйрәт әле, тине. Ғәлимәгә был оҡшап ҡалды һәм хәҙер инде, бушағанын ғына көтөп алып, Хәтирәгә тулы дәрестәр бирә башланы. Яҙыуын, уҡыуын ҡабатлатты, китаптар биреп, аҙаҡ тикшереп, һөйләтеп, фекерләшеп теңкәһенә тейҙе. Теләге булмаһа ла, тырышты уҡыусы, сөнки уҡытыусыһының теремекләнеүен, хатта талапсан булып китеүен күҙәтеү шатлыҡ ине уға. Ә инде хужа өйҙә булмаған кистәрҙә төндәр буйы һөйләшеп ултырыуҙар, элекке бәхетле мәлдәрен хәтерләп, илашып-йырлашып, серҙәре менән бүлешеүҙәр үҙе бер ғүмер булды.

Ғәлимә йортонда биш йылдан артыҡ йәшәне ул. Хәҙер инде бер туған булышып бөттөләр. Черновтың да ышаныһын яуланы, яуланы ғына түгел, өйөн, балаларын тулыһынса ышанып ҡалдырыр кешеһенә әйләнде. Ҡатыны ла бауыр баҫып ылыҡҡас, етмәһә, йәненә дауа тапҡас, Хәтирәнең срогы тулғас та бында ҡалырға тәҡдим яһаны.

- Эш хаҡы түләрмен, ҡал, бынан һуң хәҙер һиңә эш табыу ҙа ауыр булыр, - тине ир кеше.

Хәтирә ҡапыл ғына яуаплай ҙа алманы. Нисек инде... ҡалырға? Уның кәүҙәһе генә бында йөрөй, күңеле күптән унда, Бетерәһе өҫтөндә оса.

- Ҡала алмайым шул, Алексей Петрович, бик теләһәм дә... Унда мине әсәйем көтә. Ғәйеп итмәгеҙ инде.

Ғәлимә тимер юл вокзалында түгелеп илап тороп ҡалды. Саҡ ысҡынып ултырып китте Хәтирә. Әхирәте менән өс йыл туҡтауһыҙ хат алышып торҙолар ҙа, ҡапыл яуап килмәҫ булды. Хәтирәнең ныҡышып яҙған хаттарына бер көн Черновтан ике-өс һөйләмлек кенә хәбәр килде. Ғәлимә вафат булып ҡалған ине. Күбәләктәй генә яралы йәнен артабан йөрөтөр көс тапмаған икән был гонаһлы ерҙә. Күккә, үҙ урынына юлланған, күрәһең. Шул хәбәрҙе алған көндө үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр әхирәте рухына бағышлап аят уҡыны. Унан киләсәктә уҡыласаҡ аяттарҙың барыһында ла иң яҡындары исеме теҙмәһендә Ғәлимә Әҙәм ҡыҙы ла булды.

**(Дауамы бар).**

✓ *Урал йөрәгендә ҡатҡан йәштәй,*
*Тау гәлсәре торһон иҫкәртеп -*
*Изге яуға сыҡҡан ысын батыр*
*Тик башҡортта ғына үҫкән тип!*



ЗАУЫҠ

# ЙӨРӘК ҠУҘЫН ИЛТӘМ МИЛЛӘТ ЯҠҠАН

## Халыҡ ғәме тигән усаҡҡа.

Лариса АБДУЛЛИНА



### Меӊ ҡәүеме

Һауаларҙы ярып бер һүҙ осто:
"Алаҫ!" - тине берәү алыҫтан.
Ҡояш нурҙарылай, яҡты оран,
Үткерерәк ауаз ҡылыстан.
"Алаҫ!" - тине ҡор башының йәне,
"Алаҫ!" - тине илдең атаһы:
Еткерҙеләр ҡәүем ҡәлебенә
Боронғоноң һүҙен, батаһын.
Ҡәнзәфәрҙең тоҡомдары ҡайҙа?
Ҡайҙа уландарың, Иҙеүкәй?
Сарсағандыр вариҫ тауышына,
Замана аһәңенә был еркәй!
Туҡтар бейҙең нәҫел ебе - бында,
Ошо ерҙә ҡәбере хәҙрәттең.
Алпамыша бында алышҡан бит,
Сәлимәнең йыры - үҙәктә.

Күл, ҡырҡ-өйлө, ҫубый, меркет, ҡобау,
Әлшәй мәргәндең был ырыуы.
Күҙ алдыма килә Дим буйында
Яҡты тирмәләрең ҡороуың.
Зиһен айҡай "Шарлы урман" йыры,
"Йыйын ғына халыҡ бер булһаң"...
"Алаҫ" тигән оран торғоҙорлоҡ,
Сабып барған саҡта һин ауһаң.
Балаҫ-балаҫ кеүек сәхрәләрҙә
Көн иткәндә халыҡ ирәйеп,
Ерһеҙ иткән, шаңҡыҙата һуҡҡан
Хәмер генә тигән иргәйел.
Заманалар ирҙе һынаһа ла,
Сураҡайҙың ҡалған тоҡомо.
Бөгөн күрҙем ҡарсығаһын сөйөп,
Һауаларҙы ярған уҡсыны.

Илем минең, әй, ҡәҙерле төйәк,
Башҡорт донъяһында бер усаҡ.
Асылыкүлдең тулҡындары йыры,
Балҡантауҙың ҡылғандары моңо
Беҙгә тарих һөйләп торасаҡ.
Заятүләк зирәклеген халыҡ
Бетеү итеп һалған йөрәккә.
Һыуһылыуҙың иргә тоғрологон
Асылында ҡыҙҙар йөрөтә.
"Алаҫ!" - тигән оран яң(ғы)рау менән
Ҡырҡ эшемде ташлап ҡырҡ яҡҡа,
Йөрәк ҡуҙын илтәм милләт яҡҡан
Халыҡ ғәме тигән усаҡҡа.
"Алаҫ!" - тигән оран ишеткәндә
Һынала ул беҙҙең тоғролоҡ!
Беҙҙә ул - ғәм,
Беҙҙә - яҡты ғәмәл
Дауылдарға ҡаршы торорлоҡ!

### Салауат

*Замандашым*
*Салауат Хәмиҙуллинға*

Һары ҡондоҙ менән Көҫәнденең
Буйлап үтәм әле ярҙарын.
Нисәмә ҡат ошо ерҙә, халҡым,
Йәшең йотоп, яра яланың?..
Ағын һыуға сереӊ һөйлә, тиҙәр, -
Серҙән ташҡан инде Көҫәнде.
Нисә быуат ошо исем менән
Ҡәүем тоғролого үлсәнде.

Һыуға һөйләп, эсе бушамағас,
Күҙҙән ҡасып халыҡ һыҡтаған:
Йөрәгендә Уны йөрөтмәгән
Юҡ бер ата-бабам,
Юҡ туғаным минең,
Юҡ ағам.
Урмандарға сығып илағандар -
Гәлсәр булып ҡатҡан күҙ йәше.
Уралында гәлсәр тапһаң, тыңла -
Ул "Салауат!" тиеп өндәшер.

Уйым-уйым ятҡан шул йәштәрҙән
Ҡәлғә һалайыммы халыҡҡа?
Саф бер һәйкәл булып торһон, әйҙә,
Азатлыҡҡа,
Рухҡа,
Хаҡлыҡҡа!

Урал йөрәгендә ҡатҡан йәштәй,
Тау гәлсәре торһон иҫкәртеп -
Изге яуға сыҡҡан ысын батыр
Тик башҡортта ғына үҫкән тип!
Салауаттар илдә тыуып торор,
Тик һаҡлай күр, халҡым, иманым!
Урал урманында гәлсәр табып,
Мин бөгөн дә ҡасып иланым!..

### Манас

Ижадсыһы халыҡ булғанға ла
Борон заман тыуған был әҫәр.
Һөйләй уны быуын-быуындарға
Меңәр-меңәр быуын бүләсәр.
Дәүерҙәрҙән дәүерҙәргә табан,
Таш быуаттан килгән көй һымаҡ,
Айбарланып саба ҡот-уҙаман -
Яугир Манас менән арғымаҡ.
Манасчи дуҫ,
Аҫыл сәсәндәрҙең
Зиһенемә һалсы ҡөҙрәтен!
Ойотоп та "Урал батыр" моңон
Таратырға бар ул, бар дәртем.
Бер иртәкте таный донъя халҡы,
Аяғүрә баҫа ҡәүемдәр.
"Манас" тигән бер исемдән, гүйә,
Боронғонан ҡалҡа әләмдәр.
Йөрәгенән сыҡҡан аһ-зарымы,
Бәхетеме әллә ҡырғыҙҙың?
Уралымдай батыр рухын тойоп,
Саф ғәйрәттән йәшем ағыҙҙым.

...Көтөп алған бала булғанғамы?
Һайланмышмы яҙмыш асылы?
Манас тигән исем аша беҙгә
Боронғо бер дәүләт асылды.
Манас тигән илаһи зат аша
Яугир рухы тыуын күтәргән.
Боронғонан килгән зауыҡлы һүҙ
Тотош милләтенә ҡот өргән.

Өҙгөләнә манасчиның йәне,
Йөрәгенә һыймай аһ-зары.
Аһ, ниңә һуң ырыуҙашын аулап,
Ырыуҙашы яба һунарын?
Изге намаҙ мәлдәрендә генә
Арҡаһында - һабы һөнгөнөң.
Саф ышаныс, таҙа намыҫ өсөн
Ниндәй хаҡтар, батыр, түләнең?
Хоҙай алдында ла бөгөн Манас
Халҡы өсөн ҡыла доғаһын.
Үҙеңдеке яман яу булғанын -
Һүҙҙәң тоҙон һәр кем аңлаһын!

...Көндәр буйы, аҙна, айҙар буйы
Манасчилар көйләй иртәкте.
Дошманыңдан түгел, эске яуҙан
Ҡырғыҙ Манас беҙҙе иҫкәртте.
Сихри бер көй арбап ала йәнде,
Зиһендәргә тула ҡеүәте.
Йәшәү ҡанундарын заман түгел,
Шул боронғо иртәк өйрәтер.
Йыраусылар әрнеп, һағышлана,
Йыраусылар әйтә мәҙхиә!
Манас яугир - халҡы ҡаһарманы!
Манас батыр - халҡы нәбийе!

Манасчиның йөҙө йәнә балҡый,
Ул нурлана батыр зауыҡтан.
Ҡот алығыҙ манасчиһы булған,
Уралсыһы булған халыҡтан.
Изге доға кеүек тауҙар илен
Ураҡкандай Манас иртәге.
Был ҡәүемде борон эҙләгеҙ ҙә,
Киләсәктә уны көтөгөҙ!

### Юрмый

*" Асылыҡай буйы, ай, аҫыл таш,*
*Юрмый буйҡайҙары ҡырсын таш..."*
*Халыҡ йырынан*

Кемдәр бында элек көн иткәндер,
Кемдәр йырлағандыр был ярҙа?
Боронғонан ҡалған һағыштарҙы
Насип булды микән табырға?
Бөгөн бында Меӊ ҡәүеме йәшәй,
Ә күл аша - Ҡаңны ырыуы.
Туған яғын һағынып моңланғандыр
Ерһерәгән Юрмый йырауы.
"Асылыҡай буйы, ай, аҫыл таш" -
Кем һуң ғашиҡ булмаҫ был күлгә?
"Эскәйҙәрең бошһа, күңел ас" тип
Кемдер ерен иҫләп тилмергән.
Ҡайҙа йәшәй икән хәҙер улар,
Ил йөҙөндә кем һеҙ, юрмыйҙар?
Һеҙҙән ҡалған бөртөк ҡан мин тиһәм,
Кемдәр икән бөгөн танырҙар?
Әлмәтмулла төбәгенән килеп,
Ырыҫ тапҡанһығыҙ был яҡта.
Аҫабалар үҙ башҡортон таный -
Балҡыған бит һеҙҙең усаҡ та.
Иман таратам тип килгән бабам
Уртланымы икән Зәй һыуын?
Бында килеп Шаҡа буйҙарында
Баҫҡандыр ул йөрәк ярһыуын.

Ауылымда тәүге намаҙҙы ла
Уҡығандыр минең олатам.
Нисә быуат аша зекерҙәре
Йөрәгемә ҡаға йыраҡтан.
Нисәмә быуат аша сәләмдәре
Китап булып ҡайта илемә.
Шәжәрәнең рухлы ауаздары
Ҡеүәт өҫтәр ҡәүем түленә.

"Юрмый буйҡайҙары ҡырсын таш" ти,
Иҫтәлеккә алам бер ташын.
Бәлки, танып ҡалыр шул тамғанан -
Йөрәк хәбәремдән ҡәрҙәшем.

Эскәйҙәрҙең бошҡан саҡтары бар,
Шатлыҡ тулды бөгөн эсемә.
Умартаға ҡорттар йыйылғандай,
Юрмыйҙарым ҡайта күсенә.
Бер ус тупраҡ илтеп һалайымсы -
Рухы тыныс булыр бабамдың.
Ул уҡыған доға ҡеүәтенән
Тамырымды барлап табалдым.

### Сәскә атыр әле сирендәр

Миҙгел һалҡыны ла бер мәл үтер,
Ҡыш сафлығы йәндә йәшәһен.
Күңелдәрҙе иләҫләтеп бер саҡ
Атыр әле сирень сәскәһен.

Буран тимәҫ сәфәр ҡомарҙары -
Юл доғаһы тамыр ирендән.
Яҙға табан илткән һуҡмағымда
Күкрәп сәскә атыр сирендәр.

Оҙон көйҙәй ҡыштың моңонан һуң
Яҙғы тамсы балҡыр шат йырҙан.
Төпһөҙ күккә мөлдөрәшеп бағып,
Сирендәрем сәскә атырҙар.

Сәскә моңо...
Танһыҡ ҡына таңда
Оҙон ҡышты йәнем онотор.
Күк сиренле миҙгелдәрҙе көтөп,
Шул хыялый уйҙа ойотор.

Быҫҡып торған ямғыры ла үтер,
Уҙып китмә бәхет эргәмдән!
Һин уны ла арбаһаңсы тиеп,
Һорайыммы икән сирендән...

### Диалекттың әйткәне

Сулпылы сәстәй инем мин,
Үрелгән толом инем.
Матур әҙәби телдән дә
Боронғо, оло инем.
Ҡырҡып ташланды толомдар,
Һибелеп ҡалды сулпы.
Сәсен ҡырҙырған малайҙай,
Саҡ сығып килә ҡурпы.

Ҡалаларҙы әйтмәйем дә,
Ауылдарҙа мин һирәк.
Кәмене минең баһам да,
Бәҫем төштө бигерәк.
Бөгөнгө бөйөк даръяға
Һут биргән инеш инем.
Тик әҙәби тел белергә
Тейешме, имеш, илем?
Сулпылы сәстәй инем мин,
Үрелгән толом инем.
Хәҙерге дәүләт теленән
Боронғо, оло инем.

...Шишмә башына барығыҙ
Телен онотһа йәштәр.
Йәйғор ҡалҡыр күгегеҙҙә,
Нурланып балҡыр төҫтәр.

Сулпылы сәстәй инем мин,
Үрелгән толом инем.
Аҙауҙарҙан Тубылғаса
Башҡорттоң ҡоло инем!
Милләтемә ҡеүәт өҫтәр
Боронғо улы инем.

### Ҡартлас

Ултыра бер ҡартлас Уралында,
Сал сәстәрен елдәр тарата.
Ҡарашында - боронғолоҡ!
Ә йәнендә
Тәңре үҙе һалған һыр ята.
Елдәр уға буйһоналар төҫлө:
Ҡурайына тулған ер моңо.
Әллә өҙләп,
Әллә доға ҡылып,
Уралында ҡартлас ойоно...

Кемдер уны мәрткә киткән тине,
Берәү "Ясин" сыҡты ашығып.
Әүлиәләр генә барын һиҙҙе:
Ҡиәмәткә тиклем барып етер,
Был донъяға мәңге ғашиҡ ул.
Мәлен файҙаланды ҡай берәүҙәр,
Тапап үтте ҡарттың еләнен.
Ә аҡһаҡал барын тойоп торҙо -
Ниндәй икән теләк теләне?
Берәү килеп уны талап китте:
Ҡыйынмы ни ҡартҡа яҫҡыныу?
Юҡ итергә теләгәндәр булған,
Ошо хәбәр ысын, ысын ул!

Улай ғынамы ни!
Зат-зәүерен
Ҡороторға тоҙаҡ ҡорғандар.
Шәһит киткәндәрҙең ҡәлебе ул -
Һәр яу һайын ҡалҡҡан ҡурғандар.
Инде ҡырып һеперергә теләп,
Бушатырға әйткәс Ер шарын,
Һорау биргән Күктәр:
-Ә бынан һуң
Кемдең ҡаны ерҙе һуғарыр?

Меӊ яндырып, иҙеп бөтһәләр ҙә,
Юҡ, ҡымшанмай ҡартлас Уралдан.
Бары уның ғына кендең бауы
Ошо тауға әллә уралған?
Ниндәй яуҙар үткән,
Күпме ҡәүем
Ергә һеңеп, ҡабат ҡайтмаған.
Ә был ҡартлас хикмәт менән йәнә
Уралында ҡуя өс таған.

Тәбиғәттең бер өлөшө был ҡарт -
Урал кеүек, мәңге ул тере.
Уға ҡулын күтәреүсе заттар
Үҙ ҡәүемен үҙе түңкәрер!

Барын тартып, йолҡоп алып була,
Ҡырып була ерҙән халыҡты.
Тик моң илен Күктәр үҙе һаҡлай -
Юйып булмай ундай хаҡлыҡты!
Ер ҡуй(ы)нынан сыҡҡан халыҡ йыры,
Уралында үҫкән ҡурайҙар,
Әйтерһең, был ҡартластың рухы,
Ҡәүем ҡото булып һайрайҙар!
Ултыра бер ҡартлас Уралында,
Донъя малы тиеп иҫ китмәй.
Белһәң икән ниңә уны ғына
Дәүерҙәрҙең яманатлы заты,
Саң ҡағырҙай замандарҙың уты
Әллә ниңә һис тә өркөтмәй...

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӨРӘГЕҢДӘ...

## Аллаһҡа һөйөү йөрөт

■ Хәтер насар булыуына зарланырға яратабыҙ. Әммә онотоуҙың үҙенең ыңғай яҡтары бар, ти Торонто университеты ғалимдары. Хәтерҙең төп функцияһы бар нәмәне түгел, ә ҡиммәтле мәғлүмәтте генә һаҡлау. Ҡайһы бер нәмәләрҙе оноторға кәрәк тә. Ғалимдар һуңғы осорҙа хәтер насарайыу, онотоу кеүек проблемаларға арналған фәнни тикшеренеүҙәрҙе өйрәнгән. Хәтерҙә ҡалдырыу һәм онотоу һәҙәмтәһендә беҙ аҡыллыраҡ булабыҙ икән. Беренсенән, кәрәкмәгән мәғлүмәтте онотоп, яңы хәл-ваҡиғаларға яҡшыраҡ яраҡлашабыҙ. Икенсенән, үткән һәм яңы ваҡиғаларҙы берләштереп, һығымта яһай алабыҙ. Хәтергә мөхит тә йоғонто яһай. Мәҫәлән, көнө буйы йөҙәрләгән кеше менән эш итеүсе уларҙың исемдәрен тиҙ генә онотасаҡ. Ә кем бер үк кешеләрҙе йышыраҡ күрә, уларҙың хәтерендә был мәғлүмәт оҙайлыраҡ һаҡланасаҡ.

■ Бэйлор университеты ғалимдары 65 йәштәге 1024 кешене өйрәнгән. Уларҙы өс төркөмгә бүлгәндәр. Беренсеһенә христиандар, икенсеһенә элек христиан, әммә бөгөнгө көндә үҙен динһеҙ тип атаусылар, өсөнсөһөнә бер ҡасан ла Аллаһы Тәғәләгә ышанмаусылар ингән. Кем Аллаға ышанған һәм доғалар уҡыған, улар күпкә тынысыраҡ булған. Кем ышанмаған, доғалар уҡыһалар ҙа, уларҙың психик сәләмәтлеге хәүеф аҫтында тип табылған. Аллаһҡа ышаныу, йөрәгеңдә Уға һөйөү йөрөтөү өлкән йәштәге кешеләргә бик кәрәк, ти белгестәр. Бигерәк тә яңғыҙ ҡалғандарға, хаҡлы ялға сыҡҡандарға был мөһим. Был уларҙа стресс кимәлен түбәнәйтә.

■ Урта диңгеҙ диетаһы иң ҡулайлыһы иҫәпләнә. Ул сәләмәтлекте нығыта. Темпл университеты ғалимдары диетаның ҡайһы ингредиенты айырыуса файҙалы икәнен асыҡлаған. Ул - зәйтүн майы. Белгестәр Альцгеймер ауырыулы сысҡандарҙа һынауҙар үткәргән. Йәнлектәрҙе ике төркөмгә бүлгәндәр. Беренсе төркөм зәйтүн майы менән байытылған диета тотҡан, икенсе төркөмдә элекке рацион һаҡланған. Зәйтүн майы сысҡандарға алты ай булғанда, йәғни уларҙа сирҙең симптомдары күҙәтелә башлағансы индерелә башлаған. 9 һәм 12 айҙа беренсе төркөм сысҡандары эшсе хәтергә тестарҙы яҡшыраҡ башҡарған. Уларҙың баш мейеһе туҡымаларында нейрондар араһында бәйләнеш яҡшы һаҡланған.

■ Күҙҙәрҙең сәләмәтлегә өсөн йышыраҡ, хатта көн һайын брокколи ашағыҙ, тип кәңәш итә Америка ғалимдары. Был йәшелсәләге индол-3-карбинол берләшмәһе организмды токсиндарҙан таҙарта. Йәш өлкәнәйә барыу менән арилуглеводород рецепторы эше һүлпәнәйә, күҙҙәр насарыраҡ күрә башлай, төрлө специфик ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Брокколи составындағы берләшмә ошо рецепторҙарҙы әүҙемләштереп ебәрә лә инде. Брокколи составында аҡһымдар, майҙар, күҙәнәклек, селен, магний, калий, кальций, фосфор, тимер, уинк кеүек төрлө минераль берләшмәләр, С, РР, Е, K, U, бета-каротин витаминдары инә. С витамины әфлисунға ҡарағанда ике тапҡыр күберәк. U витамины сей яраларҙы булдырмай. Был витамин тағы ла спаржала бар.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**Йүкә - халыҡ медицинаһында киң ҡулланылған үҫемлектәрҙең береһе. Юлда талсығып килгән юлсы ошо ағас күләгәһендә ял итеп, хәл йыйырға мөмкин. Шулай уҡ ағас йәшен ваҡытында ышаныслы ышыҡ та, сөнки был серле ағасты йәшен урап үтә тигән ышаныу йәшәй. Ағас ҡайырыһынан борон имселәр кешеләрҙе яуыз көстәрҙән һәм төрлө ауырыуҙарҙан һаҡлаусы бетеүҙәр эшләгән. Уның дауалау сифаттары һәм зыяны белгестәр тарафынан яҡшылап өйрәнелгән һәм бөгөн көнкүрештә йүкә ағасының төрлө өлөштәренән әҙерләнгән дарыуҙар киң ҡулланыла.**



# ЙҮКӘЛӘРҘӘН БАЛ ТАМА...

### Химик составы

Япраҡтарында аскорбин кислотаһы, каротин, аҡһым бар. Шуға күрә япраҡтарын бешекләп, ауыртҡан урынға һалыуҙың файҙаһы ҙур. Сәскәләрендә тәбиғи флавонидтар, аскорбин кислотаһы, тәбиғи эфир майы, гликозидтар, еҫле матдәләр, А витамины бар. Ҡайырыһында тритерпен матдәһе, 8 процент май бар. Уның төнәтмәһен төрлө ауырыуҙар ваҡытында файҙаланалар. Бал ҡорттары йыйған нектарҙа 45 процент - сахароза, 12 процент глюкоза бар.

### Файҙаһы һәм дауалау сифаттары

Йүкәнән эшләнгән препараттар тамырҙарҙы нығыта, уларҙы һығылмалы итә, атеросклероз барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Төрлө ялҡынһыныуҙарҙы бөтөрә. Организмдан артыҡ шыйыҡлыҡты сығара, тимәк, бөйөрҙәрҙе сирлеләрҙең хәлен яҡшырта. Матдәләр алмашыныуын нормаллаштерә, ябығырға ярҙам итә. Нервылар системаһын тынысландыра, стресс һәм депрессияларҙың йоғонтоһон йомшарта. Организмды йәшәртә, ҡартайыуҙы тотҡарлай. Һалҡын алдырғанда килешә.

Йүкә сәйе, төнәтмәләре һәм компрестары невралгия, аяҡ ҡорошҡағы, ревматизм, иҫтән яҙыу, баш әйләнеү, йөкәһөҙлөк; респиратор, тын алыу системаһы; бөйөр, ашҡаҙан-эсәк тракты; аритмия, тамырҙар һәм веналар проблемаһы, гипертония, климакс; ашҡаҙан һәм бөйөр шештәре; тире ауырыуҙарына ярҙам итә.

Бик йыш үҫемлектең төрлө өлөштәрен антисептик сифатында ҡулланалар. Бигерәк тә хуш еҫле йүкә балы файҙалы.

### Халыҡ медицинаһында

Һалҡын алдырғанда: ангина йәки үпкә ялҡынһыныуы ваҡытында ике ҡалаҡ йүкә сәскәһенә ҡайнар һыу ҡойоп, 20-30 минут төнәтергә. Йоҡлар алдынан 1-2 стакан эсергә. Шулай уҡ тамаҡты сайҡатырға ла була.

Температура булғанда: 15 грамм сәскәгә ҡайнар һыу ҡойоп, 10 - 15 минут ҡайнатырға. Төнгөлөккә 2-3 стакан эсергә.

Бронхит ваҡытында 1 ҡалаҡ сәскәгә эҫе һыу ҡойорға, ҡайнатырға һәм көнөнә 100-әр миллиграмды 3-4 тапҡыр эсергә.

Быуындар ауыртҡанда йүкә япраҡтарын ҡайнар һыу менән бешекләп, ауыртҡан урынға ҡуйырға һәм урарға, шул килеш 2 сәғәт самаһы торорға кәрәк.

Баш ауыртҡанда яңы ғына өҙөлгән япраҡтарҙы маңлайға ҡуйып, ауыртыу туҡтағансы тыныс ҡына ятырға.

Стоматиттан бер аш ҡалағы йүкә сәскәһенә ҡайнар һыу ҡойоп, 20-30 минут көтөргә һәм һарҡытып, ауыҙҙы сайҡатырға.

Йоҡоһоҙлоҡтан интеккәндә, стресс кисергәндә 100-200 г сәскәгә 2 литр һалҡын һыу ҡойоп, 10-15 минут көтөргә, һуңынан 5-10 минут ҡайнатырға. Һарҡытҡас, тағы 10 минут көтөргә һәм төнәтмәне ҡушып, ванна инергә. Бындай ваннаны аҙнаһына бер тапҡыр 30 минут самаһы инергә кәрәк. Һыуҙың йылылығы 37-38 градус булһын. Ванна инерҙән алда, йыуынырға кәрәк. Һуңынан инде ваннала ятырға мөмкин.

### Кемгә ҡулланыу ярамай?

Үҫемлекте бөтөн кешегә ҡулланырға рөхсәт итеlһә лә, дарыу булараҡ, уның да самаһын белергә кәрәк. Мәҫәлән, әгәр башҡа шыйыҡлыҡ эсмәйенсә, уның урынына даими йүкә сәйе эсқәндә, күреү һәләтен кәметергә мөмкин. Шулай уҡ йөрәк эшмәкәрлеге менән проблемалары, бөйөрҙәрендә таш, ҡан ойошоусанлығы насар булыусыларға ла, аллергиктарға ла, астматиктарға ла, шәкәр сирлеләргә, нервы ҡаҡшауы менән яфаланыусыларға ла һаҡ булырға кәңәш ителә, сөнки оҙайлы ваҡыт йүкә төнәтмәләрен эсеү хәл-торошто насарайтыуы ихтимал. Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: төнәтмәләрҙе сәй урынына ҡулланыу тыйыла, был дауаны курслап эсергә, йәғни 1 ай шифалы төнәтмә эскәндән һуң 14 көн ял итергә кәрәк. Шулай уҡ экологик яҡтан таҙа булмаған (автотрассалар, сәнәғәт предприятиелары зоналары) урындарҙан йыйылған сеймал да дарыу түгел, ә ағыу булыуы мөмкин.

### Йүкәнең ир-ат өсөн файҙаһы

Барлыҡ рецептар ир-атҡа ла ҡулланыуға яраҡлы, әммә бер генә кире яғы бар - артыҡ күп мауығыу гормональ фондың боҙолоуына килтереүе мөмкин. Башҡа осраҡтарҙа инде йүкә сәскәһе төнәтмәһе ҡуҙғыусанлыҡ, агрессивлыҡ, ҡыҙыулыҡ күҙәтелгәндә, простатит, геморрой яфалағанда файҙалы.

Простатитты дауалау өсөн ағастың ботағын яндырып, барлыҡҡа килгән көлдө йыйып алырға кәрәк. Иртән уны кофе урынына ҡулланырға: 1 балғалаҡ сеймалға ҡайнап торған һыу ҡойорға. Дауаланыу курсы - 30 көн, һуңынан 30 көн ял. Дауаланыу ваҡыты - өс курс.

### Балалар өсөн

Ғәҙәттә, бәләкәстәргә дарыу йәки сироп эсереп булмай. Ә бына баллы йүкә сәскәһе сәйен улар рәхәтләнеп эсә.

Температура төшөрөү өсөн 20 гр кипкән сәскәгә 3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Һуңынан һарҡытып, йоҡлар алдынан 200 мл бирергә.

Ангина ҡалҡҡанда 200 мл стаканға 1 ҡалағы сәскә һалып, ҡайнап торған һыу ҡойорға һәм 20 минутҡа ҡалдырырға. Төнәтмәне һарҡытып, төнгөлөккә бал йәки ҡурай еләге ҡайнатмаһы менән эсергә.

Әгәр сабыйығыҙ тынысһыҙ, һәр саҡ хәрәкәттә, тынысланып йоҡлап китә алмай икән, уға тынысландырыусы ванна кәрәк. Ҙур булмаған ваннаға һыу тултырығыҙ һәм уға 50 гр кипкән сәскә һалып, балаңы йыуындырығыҙ. Тап йүкә төнәтмәһе баланың нервылар системаһын йәйға һалырға ярҙам итә.

### Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн

Гинекологияла йүкә сәскәһе өҫтәмә дауа итеп ҡулланыла. Күрем циклы боҙолғанда йүкә сәскәһенең төнәтмәһен эсергә кәрәк. Ә инде 40 йәште үткән ҡатын-ҡыҙға ярты йылға бер тапҡыр 28 көн дауамында иртән 1-2 стакан төнәтмә ҡулланыу зарур. Был һеҙгә климаксты енел үткәрергә ярҙам итер, менопауза һуңыраҡ башланыр.

Молочница, бүлендектәр, ҡысытыу симптомдары булғанда, төнәтмә менән спринцевание ярҙам итә. 1 литр ҡайнар һыуға 1 стакан кипкән сәскәләрҙе һалып ҡайнатырға һәм 8 сәғәт самаһы төнәтергә кәрәк. Ҡулланыр алдынан төнәтмәне йылытығыҙ. Дүрт көн дауамында иртән-кисен ҡулланығыҙ.

Йөклө саҡта,ә ҡатын-ҡыҙға дарыуҙар ҡулланыу тыйылғанлыҡтан, күптәр халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итә. Фитотерапевтар буласаҡ әсәләргә йүкә сәскәһенән сәйҙе түбәндәге осраҡтарҙа эсергә тәҡдим итә: һалҡын алдырғанда. Был саҡта бер сәғәт эсендә ике сынаяҡ (әммә көнөнә 500 грамдан артыҡ булмаһын!ә) йүкә сәскәһе сәйен эсеү кәрәк. Бер стакан өсөн 15 мг киптерелгән сеймал талап ителә. Аяҡтар һәм ҡулдарҙың шешенеүен кәметеү өсөн иртән 200 мл шундай төнәтмә эсеү файҙалы.

Киҫкен цистит яфалағанда ярты стакан сәскәнә 500 мл һыу менән бешекләргә һәм 3 минут ҡайнатып алырға. Һуңынан төнәтмәне һарҡытып, 12 сәғәт дауамында эсергә.

### Косметология

Был үҫемлек шулай уҡ тиренең ваҡытынан алда ҡартайыуына ҡаршы һөҙөмтәле сара булып тора. Төнәтмәләре һәм битлектәре тирене тығыҙлай, эпидермистан һаҡлай. Әгәр үҙегеҙ ҡулланған кремға бер нисә тамсы йүкә төнәтмәһе ҡушһағыҙ, уның һөҙөмтәһе күпкә артыр. Шулай уҡ көн һайын йүкә төнтмәһе менән йыуыныу ҙа ҡартайыуҙы кисектерә. Төнәтмәгә бал ҡушҡанда, ул тағы ла файҙалыраҡ буласаҡ.

Сәстәрегеҙ йәнһеҙ, төҫһөҙ икән, көн һайын йүкә сәскәһе төнәтмәһе менән сайҡау уларға йәм өҫтәр. Төнәтмәне эшләүе ауыр түгел: 40 гр сәскәгә 1 литр һыу һалып, 20 минут ҡайнатырға. Сәстәрегеҙ майлы булһа, 20 гр сәскәгә ярты литр һыу һалып, 2 минут ҡайнатығыҙ, һуңынан лимон һуты һәм 50 мл спирттағы тырнаҡ гөлөн (календула) ҡушығыҙ.

### Ҡасан һәм нисек йыйырға?

Йүкә сәскәһен һәм уның башҡа файҙалы өлөштәрен йыйыу июнь һуңында, июль урталарында башҡарыла. Миҙгел үҙенсәлектәренә ҡарап, был мөҙҙәт бер аҙ үҙгәргә лә мөмкин. Шуға күрә, иң уңайлы ваҡыт - йүкәнең сәскә ата башлауы. Уларҙы көндөң төүге яртыһында йыйыу яҡшы. Көн елһеҙ, йылы һәм дымлы, аяҙлы-болотло, һауа температураһы 25 градустан түбән булмаҫҡа тейеш. Ямғыр, һыуыҡ йәки елле көндә сеймал йыйырға ярамай. Шулай уҡ япраҡтарҙа ысыҡ булһа, уларҙың кипкәнен көтөү кәрәк. Сәскәләрҙе ҡайсы менән ҡыркып алыу яҡшы.

Йыйылған сеймалды ҡоро ерҙә, еләгән бинала киптерергә кәрәк. Уларҙы әйләндереп, болғап тороу урынлы. Кипкәнме, юҡмы икәнен белеү өсөн һындырып ҡарағыҙ. Сеймал һына икән, тимәк, ул матур кипкән.

**Иҫкәрмә: халыҡ медицинаһын ҡулланып дауаланыуҙан алда табип менән кәңәшләшергә онотмағыҙ!**

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

✓ Ниндәй йәмғиәттә йәшәйһең, шуның йырын йырлайһың. Социаль мөнәсәбәттәрҙе үҙең йәшәгән йәмғиәттән ситтә ҡороп булмай. Ситтә ҡорһаң, ситтәге йәмғиәттең йырын йырларға тура киләсәк.



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# НИНДӘЙ ЙӘМҒИӘТТӘ ЙӘШӘЙҺЕҢ...

## шуның йырын йырлайһың



**Донъя ҡасан яралған, ваҡыттың, йәғни мәңгелектең сиге бармы, Йыһан киңлеге ҡайҙа бөтә, ғөмүмән, бөтәме ул? Ошо турала уйланғанығыҙ бармы? Бындай төшөнсәләр алдында сал сәсле Фән дә әлегә бер ҡатлы балаға һымаҡ.**

Уйҙарыбыҙ менән яңғыҙ була алһаҡ та, йәмғиәттә йәшәйбеҙ икән, социаль яҡтан тормошта беҙ яңғыҙ түгелбеҙ шул. Теләйбеҙме-юҡмы, һәр беребеҙ кешелек уйлап тапҡан ҡанундарға, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡағиҙәләргә буйһона, беҙгә тиклем йәшәгәндәрҙең һабаҡтарын өйрәнә, киләсәк быуынға яңы ҡағиҙәләрҙе көсләп таға. Шунһыҙ булмай: тормош бит ул - ниндәй йәмғиәттә йәшәйһең, шуның йырын йырлайһың. Социаль мөнәсәбәттәрҙе үҙең йәшәгән йәмғиәттән ситтә ҡороп булмай. Ситтә ҡорһаң, ситтәге йәмғиәттең йырын йырларға тура киләсәк. Хатта берәй сит планетала йәшәү мөмкинлеге була ҡалһа, унда ла үҙенә күрә йәмғиәт барлыҡҡа килер, моғайын.

Бөйөк фәйләсүф Эммануиль Кант йәмғиәт ҡанундарын инҡар итеп, үҙенең ҡағиҙәләре буйынса ғына йәшәгән, тиҙәр. Ул тик бер тапҡыр ғына, никах теркәргә барған ваҡытта ғына, ҡағиҙәләренән тайпылған, йәмғиәт ҡушҡанса эшләгән. Эйе, ирекле йәшәгән ул, әммә ул да үҙ ҡағиҙәләренең ҡоло булған түгелме? Тимәк, үҙе йәшәгән йәмғиәттең ағзаһы булараҡ, тулыһынса азат була алмаған, үҙ ҡанундарына бикләнгән.

"Йәмғиәттә йәшәп, йәмғиәттән үҙаллы булып булмай", тигән Ленин бабай ҙа. Быны, исмаһам, дөрөҫ әйткән. Үҙенең хаҡ юлда булыуына йөҙ процентҡа ышанмаһа, ҡанлы революция яһап та тормаҫ ине. Социаль мөнәсәбәттәрҙең бер кимәлдә булыуын, йәғни бөтәбеҙҙең дә тиң хоҡуҡлы булыуын теләгән бит ул. Әммә бының өсөн социаль мөнәсәбәттәрҙең вертикаль, йәғни юғарынан түбәнгә идара ителеүе кәрәклеген инҡар итә алмаған. Теләге лә булмаған. Юғиһә, Бөйөк француз революцияһы осоронда уҡ яңғыраған "Туғанлыҡ. Тигеҙлек. Азатлыҡ" лозунгыһы ғәмәлгә ашырылыр, һәм ул йәшертен генә "Абруй. Буйһоноу. Тәртип" һүҙҙәренә алмаштырылмаҫ ине. Буйһоноу аңлашыла. Был осраҡта мөнәсәбәт хакимлыҡҡа һәм буйһоноуға ҡорола. Ябай мөнәсәбәт. Нәҡ әрме уставындағы кеүек: "Беренсе параграф - командир һәр саҡ дөрөҫ әйтә, икенсе параграф - дөрөҫ әйтмәһә, беренсе параграфты ҡара". Ҡыҫҡаһы, көслөнөкө - замана, йәғни джунгли законы. Тәртип тә шулай уҡ ябай мөнәсәбәткә ҡайтып ҡала. Ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәһәң, һинән дә аҡыллы, һинән дә тәртипле кеше юҡ. Иң мөһиме, закондар кешене бурыслы ғына итмәй, хоҡуҡтар ҙа бирә, йәғни азатлыҡтың сикләмәй. Хоҡуҡтарыбыҙ ни тиклем күп, беҙ шул тиклем азат, йәнәһе. Ә бит һәр хоҡуҡ беҙҙе нимәгәлер бурыслы итә, йәғни хоҡуҡ-азатлыҡ бушҡа бирелмәй - буштың атаһы күптән үлгән. Мәҫәлән, һинең теге йәки был йәмғиәттә йәшәргә хоҡуғың бар икән, һин ул йәмғиәттең йырын йырларға тейеш. Япъябай.

Абруй төшөнсәһен ҡарап үтәйек. Был төшөнсә бөгөн барлыҡҡа килмәгән, бөтөн кешелек донъяһы уны меңәр йылдар буйы туплаған. Ана шул меңәр йылдар буйы тупланған, анығыраҡ һеңдерелгән стереотиптарҙан, йәғни кешелек абруйынан ҡотолоуы, ай-һай, еңел түгел. Унан нисек ҡотолорға һуң? Һәм, ғөмүмән, ҡотолоу кәрәкме икән? Кешелек донъяһы үҫешкән һайын, ана шул абруй-йолаға беҙ йә тулыһынса буйһоноп йәшәйбеҙ, йә ҡаршы сығып маташабыҙ. Ер йөҙөндә йәшәгән кешеләр араһындағы төп мөнәсәбәт ошо ике арауыҡта ҡорола - йә инҡар итеп, яңы мөнәсәбәт барлыҡҡа килә, йә яраҡлашып, ағым буйынса йәшәү дауам итә. Тимәк, һәр кеше бер үк ваҡытта буйһона ла, ризаһыҙлыҡ та белдерә, йәғни ҡапма-ҡаршылыҡлы ике полюс араһында йәшәй. Социаль мөнәсәбәттә быны күреп, тойоп була. Ә бит кеше үҙенең эске, уйхистәр, кисерештәр донъяһында ла ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар менән йәшәй. Бер төрлө уйлай, икенсе төрлө эшләргә мәжбүр. Сөнки көйҙә боҙорға ярамай, йәғни йырҙа артыҡ һүҙ булмай.

**Фекер ебен артабан тағатып тормай, рубриканың талабына ярашлы, кинәйә тәҡдим итәбеҙ. Ул бынан алдағы "Бер ҡыйыҡ башы... ике төрлө донъя" кинәйәһе кеүек, кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә ҡоролған.**

"Бер кеше берҙән-бер ҡыҙын тормоштағы бөтөн ҡурҡыныс күренештәрҙән ҡурсаларға булған. Үҫмер йәшенә етеп, сибәрлеге сәскәләргә тиңләшкәс, ул ҡыҙын үҙе янына саҡырып алған да был тормошта уға ниндәй мәкерлектәр, әшәкелектәр осрарға мөмкинлеге тураһында аңлата башлаған. "Һөйөклө ҡыҙым, мин әйткәндәрҙең бөтәһен дә иғтибар менән тыңла һәм аңлап ҡабул ит, - тип башлаған ул һүҙен. - Бөтөн ирҙәр ҙә тик бер нәмә тураһында уйлай. Улар шул тиклем хәйләкәр: үҙҙәренең мәкерле уйҙарын тормошҡа ашырыу өсөн һәр ерҙә ау ҡора. Енси теләктәрен ҡандырыу өсөн улар бөтәһенә әҙер. Һин яңылышып ҡуймаһын өсөн мин һинә бәхетһеҙлеккә илтеүсе юлды аңлатып бирәм. Ирҙәр иң тәүҙә һинең матурлығына һоҡланасаҡ. Бер көн шуларҙың береһе: "Әйҙә, урам буйлап йөрөп киләйек", - тип, тәҡдим яһаясаҡ. Өйҙәренең эргәһенән үтеп барғанда ул юрый ғына: "Пальтом өйҙә ҡалған, шуны алып сығам, бәлки, һин дә беҙгә инерһең", - тип әйтәсәк. Өйҙәренә ингәс, ул һине артыла саҡырасаҡ һәм сәй тәҡдим итәсәк. Һеҙ бергәләп сәй эсә-эсә, музыка тыңлаған ваҡытта, ул ҡапыл, уйламаҫтан, һиңә ташланасаҡ һәм... һине хур итәсәк. Был минең өсөн дә, әсәйең өсөн дә күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы буласаҡ. Бөтөн зат-ырыуыбыҙ өсөн бынан да ҙур оят юҡ!".

Ҡыҙ атаһының һүҙҙәрен бик иғтибарлы тыңлаған һәм йөрәге менән ҡабул иткән. Көндәрҙән бер көндө ҡыҙ атаһы янына ғорур атлап килгән дә: "Атай, һин күрәҙәселер ул, - тигән. - Тап шулай булырын ҡайҙан белдең? Бөтәһе лә нәҡ һин һөйләгәнсә булды. Башта ул минең сибәрлегем менән һоҡланды. Һуңынан урам буйлап йөрөп килергә саҡырҙы. Өйҙәренең эргәһенән үтеп бара инек, ул, пальто һылтауы менән, өйөнә саҡырҙы. Итәғәтле генә итеп сәй тәҡдим итте, музыка ҡуйҙы. Шул саҡ мин һин әйткән һүҙҙәрҙе иҫемә төшөрҙөм. Һин өйрәткәнсә, ни булырын алдан белә инем бит! Ҡайғырма, атай, ҡыҙың йөҙөңә тап төшөрмәне! Егет миңә ташланырға тейеш мәлдә генә мин үҙем уға ташландым - үҙен дә, ғаиләһен дә, зат-ырыуын да оятҡа ҡалдырҙым!.."

Рубриканы
**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
алып бара.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Фекерләү һәм байлыҡ кимәле араһындағы бәйләнештең асыҡ сағылышы булып төрлө лотореяларҙа еңеүселәр тора. Улар ошо буштан килгән аҡса менән барлыҡ проблемаларын хәл итергә уйлай. Шуға ҡарамаҫтан, был бәхетлеләр бер нисә йылдан тағы ла бурыс һаҙлығына бата һәм аҡса отканға тиклемге тормошонан да насарыраҡ йәшәй башлай. Ни өсөн? Сөнки "ярлылыҡ маңлайыма яҙылған инде" тигән инаныу менән йәшәһәң, әллә күпме миллиондарҙан да тиҙҙән бер тин дә ҡалмаясаҡ. Банк иҫәбенең торошо һәр саҡ беҙҙең инаныуҙар системаһына тап киләсәк. Әгәр ҡапыл шәхси "мин"ебеҙ иҫәп балансына тура килмәһә, иҫәп балансын алмаштырыу еңелерәк. Бында тағы ла тормошобоҙ менән тышҡы шарттар түгел, ә уй-фекерҙәребеҙ идара итеүенә инанабыҙ.

### Ярлылыҡтың ыңғай яҡтары

Ни өсөн һәр саҡ ярлылыҡта йәшәүҙәре тураһында баш ватып, кешеләр бер ваҡытта ла үҙҙәренә ябай ғына һорау биреп ҡарамай: "Ярлылыҡта миңә нимә оҡшай?" Уның да бит ыңғай яҡтары бар. Мәҫәлән:

- "Үҙемде Аллаһы Тәғәләнең һайлаған бәндәһе тип хис итәм. Юҡҡа ғына "Ярлылар бәхетле..." тимәйҙәр
- "Мин - барыһы кеүек үк. Ярлы булғанда, дуҫтарым алдында үҙемде ғәйепле тоймайым.
- "Мине барыһы ла йәлләй".
- "Миңә тәртип тураһында уйларға кәрәкмәй".
- "Миңә ғәҙәттәремде үҙгәртергә кәрәкмәй".
- Иң мөһиме: "Бөтөн нәмәлә тирә-яҡтағыларҙы, шулай уҡ хөкүмәтте лә ғәйепләргә мөмкин".

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә ярлылыҡта йәшәү уңайлы. Әлбиттә, бер кем дә үҙ теләге менән ярлы булыуын танымай, әммә үрҙә яҙылған исемлек шәп, шулай бит? Бөтөн нәмәнең дә, хатта үҙ теләгең менән ярлы булыуҙың да, ыңғай яҡтары бар.

### Атай-әсәй нимәгә өйрәтә?

Атай-әсәйегеҙҙән "Эшләү - проблема түгел", "Беҙҙең аҡсабыҙ һәр саҡ бар", "Ни тиклем күп тотонаһың, шул тиклем күберәк аҡса килә", тигәнде ишеткәнегеҙ бармы? Йәғни, улар йышыраҡ "Бөтөн бәләләр - аҡсанан", "Беҙ үҙебеҙгә быны рөхсәт итә алмайбыҙ", "Аҡса күктән яумай", ти инеме? Икенсе вариант ныҒыраҡ таныш икән, тимәк, атай-әсәйегеҙгә үҙҙәренең инаныу системаһын балаларына тапшырыу насип булған. Хәҙер һеҙгә лә, улар кеүек үк, даими сығымдар һәм юғалтыуҙар менән йәшәргә тура киләсәк.

### Аҡсаға тыныс ҡарарға кәрәк!

Күпселек аҡса тураһында һөйләшеүҙән ояла, ә енси бәйләнеш тураһында һөйләшеүҙән - юҡ. Ҡайһы берәүҙәргә аҡса биреүе ни тиклем ауыр икәнен иҫкә алғанығыҙ бармы? Улар: "Аҡсам бар, барыһы ла һәйбәт. Ысын, миңә етә", - тип аҡлана башлай. Ә һеҙ уларҙың икмәк менән һыуҙа ғына йәшәгәнен яҡшы беләһегеҙ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# "УРАЛ БАТЫР"ЛЫ ХАЛЫҠ БЕҘ!

(Башы 1-се биттә).

Бөрйән ерендәге оло сарағa фатиxaһын биреп, район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов:

- Балаларыбыҙ "Урал батыр" эпосын йөрәге аша үткәреп ятлай икән, улар үҙенең тиҫтерҙәренән күпкә алдараҡ барасаҡ, тормош асылын нығыраҡ аңлаясаҡ. Эпостағы изгелек менән яуызлыҡ көрәше лә баланы аҡ менән ҡараны айырырға өйрәтә, уның рухын нығыта. Был сара балаларҙың һәләтен асыу йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә. Әллә нисә быуындар буйы телдән-телгә күсеп килгән был ҡомартҡыны артабанғы быуындарға тапшырыу - беҙҙең оло бурыс. Балаларға бәйге сәме теләйем, - тине.

Халҡыбыҙҙың тиңһеҙ рухи байлығы булған "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләүсе йәш сәсәндәр бәйгеһен артабан район мәктәптәренең һәләтле балалары сәләмләне: береһенән-береһе дәртлерәк бейеүҙәр, йырҙар алышынып ҡына торҙо. Районда мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында үткән "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләүселәр бәйгеһендә ҡатнашыусы Ләйсән Ҡарабаеваның, 2 йәшлек кенә Фаягөл Аҫҡарованың сығыштары халҡыбыҙҙың был аҫыл ҡомартҡыһының артабан да халыҡ күңелендә йәшәйәсәгенә дәлил булып яңғыраны. Яңы Усман балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре иһә көйәнтәләренә "ҡаҙ түшкәләрен" элеп сығып, "Ҡаҙ өмәһе" бейеүен башҡарҙы.

Ял итеп алғас, барыһы ла эпосты ятҡа һөйләүселәрҙең сығыштарына тамаша ҡылырға йыйылды. Йылдан-йыл балалар оҫтара, сәсәнлек йәһәтенән маһирлана ғына бара икәнлеген күрһәтте бәйге. Ролгә инеп, бөтә йөрәктәре менән һөйләне балалар әҫәрҙе. Йәмле Күҙәмбәт туғайы ҡобайыр рухына күмелде.

Ошо мәртәбәле сараның алыштырғыһыҙ баһалама рәйесе булған арҙаҡлы яҡташыбыҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновты бер минут тын ҡалып хәтерләне сараға йыйылыусылар. Кисенә академик Ә. Сөләймәновтың хәтер кисәһе ойошторолдо. Уны асып, БР Мәғариф министрлығы вәкиле Гөлсәсәк Мөхәмәтйәнова остазына ҡарата күңелендә йөрөткән йылы тойғолары менән бүлеште, оло ғалимдың эшмәкәрлеге, кешелеклелеге хаҡында бәйән итте.



Район хакимиәте башлығы Р. Шәрипов:

- Ҡапыл ғына китеп барҙы Әхмәт ағайыбыҙ. Рәхмәттәребеҙҙе лә әйтә алмай ҡалдыҡ. Уның васыяттарын тормошҡа ашырырға тырышырбыҙ. Ғалимдың музейын булдырыу буйынса эштәр алып барыла ла инде. Оло ғалимдың исемен мәңгеләштереү, уның рухын шат ҡылыу өсөн күмәкләп, бергәләп эшләйек, - тине.

Әйткәндәй, Әхмәт ағай үҙенең музейын күреү бәхетенә өлгәшкән шәхестәрҙең береһе булды - Әбделмәмбәт мәктәбендә бынан 5 йыл элек үк уның исемендәге фольклор музейы асылғайны. Хәтер кисәһендә Әбделмәмбәт мәктәбе уҡыусылары "Мин Өфөгә барып ҡына ҡайттым" тигән сәхнәләштереү күрһәтеп, олуғ ғалимдың рухын ололаны.

- Был сәхнәлә күрһәтелгән ваҡиғаларҙың байтағын "танып" ултырҙыҡ - улар хаҡында атай һөйләгәйне. Атай беҙҙең өсөн һәр яҡтан өлгө, дуҫ, кәңәшсе булды. Онотолоп китеп, атайҙың инде юҡ икәнен хәтерҙән сығарып, теге йәки был эш буйынса уның фекерен белмәк булып әллә нисә тапҡыр телефоныма үрелгәнем дә булды, - тине Йәлил Әхмәт улы.

- Атайым, ысынлап та, Өфөлә командировкала ғына булды, шикелле, - тине Нәркәс Хөбөтдинова (Сөләймәнова), филология фәндәре докторы, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре, жюри рәйесе. - Ул һәр ваҡыт төйәгенә, Бөрйәненә атлығып торҙо. Төрлө конкурстар, саралар, һабантуй булһынмы, ҡайта һалыр ине. Бына хәҙер уның башлаған эштәрен дауам итеп, тыуған төйәккә йышыраҡ ҡайтырбыҙ, тип уйлайбыҙ. Был сарала мин беренсе тапҡыр. Жюри рәйесе итеп саҡырғастар, башта баҙап ҡалдым, сөнки был вазифаны быға тиклем минең атайым Әхмәт Сөләймәнов башҡара ине. Быйылғы бәйге уның иҫтәлегенә бағышлана, тигәстәр, баш тартманым. Әлбиттә, эшләүе еңел түгел, сөнки бөтә балалар ҙа шундай талантлылар, үҙенсәлеклеләр, сағыуҙар. Кемделер айырып ҡына, бына быныһы яҡшы, быныһы насарыраҡ, тип әйтеүе ҡыйын. Бөрйән районы командаһының да сығышы яҡшы булды, һоҡландырҙы. Ғөмүмән, эпосты сәхнәләштереүселәрҙең һәм яңғыҙ башҡарыусыларҙың образға инеп, йөрәктәре аша үткәреп, мәғәнәһенә төшөнөп һөйләүҙәре шатландыра...

Нәркәс Әхмәт ҡыҙы менән Йәлил Әхмәт улы "Мин Өфөгә барып ҡына ҡайттым" тигән тамашала ҡатнашҡан балаларға атайҙарының "Беҙҙең илдең йәме" тигән китабын тапшырҙы. Ошоноң менән оло сараның тәүге көнө тамамланды.

Икенсе көндө командалар ике этапҡа бүленеп, башҡорт эпостарынан өҙөктәр сәхнәләштерҙе. "Урал батыр" эпосына мөрәжәғәт итеүселәрҙән тыш, "Ҡола айғыр, "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Ҡара юрға" кеүек халыҡ ижады ынйыларын сәхнәләштереүсе командалар ҙа байтаҡ булды. Командалар рухи ҡалҡаныбыҙ булған мәшһүр эпос эҙҙәре буйлап Шүлгән мәмерйәһенә, Йылҡысыҡҡан күленә сәйәхәт ҡылды, Бабсаҡ бей ҡорғанында һәм башҡа тарихи урындарҙа ла булды. Ә кис һүҙ оҫталары Байназар мәктәбе коллективы әҙерләгән сағыу һәм дәртле концерт-дискотекала рәхәтләнеп күңел асты, аралашты.

Шулай итеп, еңеүселәр ҙә билдәле булды. Өҙөктәр сәхнәләштереү туры еңеүселәре араһында беренсе урында - Учалы командаһы, 2-се урынға Сибай, Баймаҡ ҡалалары һәм Ишембай районы, Өфө ҡалаһының Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге гимназия-интернаты лайыҡ булды. Өсөнсө урынды Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө һанлы гимназияһы, Өфө ҡалаһының Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты һәм Бөрйән районының Яңы Мөсәт мәктәбе командалары яуланы. Шулай уҡ яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеүсе Балтас, Архангел, Дәүләкән, Күгәрсен, Шишмә, Әлшәй райондары, Өфөнөң 38-се, 122-се гимназиялары БР Мәғариф министрлығының Маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнде.

Йылдағыса, "Урал батыр" эпосын ятҡан һөйләүселәр туры 3 төркөмдә баһаланды. Бәләкәйҙәр (2-4-се синыфтар) төркөмөндә Учалы ҡалаһының башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Ләйсән Золотарева 1-се урын яуланы. 2-се урынға Баҡалы районынан Миләүшә Дусиева, 3-сө урынға Иҫке Монасип мәктәбенән Сара Истәкова лайыҡ булды. Урта һәм өлкән синыфтар араһында беренсе урынды Салауат ҡалаһынан 25-се гимназия уҡыусыһы Ралина Нафиҡова менән Сибай гимназия-интернаты уҡыусыһы Сөмбөл Ласынова яуланы. 2-се урынға Әлшәй районының Ҡармыш мәктәбенән Ғәлим Һәүбәнов, Дәүләкән районынан И. Сафина, 3-сө урынға Миәкә районының Илсеғол башҡорт гимназияһынан Ғәлиә Шәйәхмәтова менән Ишембай районының 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Гөлсәсәк Шәрипова лайыҡ тип табылды.

Гран-приға Баймаҡ лицей-интернаты уҡыусыһы Гөлнара Ҡазарбаева лайыҡ тип табылды. Ул БР Мәғариф министрлығы тарафынан булдырылған профессор, филология фәндәре докторы Ә. Сөләймәнов исемендәге премияға лайыҡ булды.

- "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһе үткәрелә башлағандан жюри ағзаһымын, -тине филология фәндәре докторы, БДУ профессоры, жюри ағзаһы Мирас Иҙелбаев конкурс тәьҫораттары менән уртаҡлашып.- Беренсе йыл үткән бәйгелә эпосты тулыһынса ятлаған бер генә уҡыусы булды - Венера Баймөхәмәтова. Унан һуң 16 йыл үтте, бәйге төрлө райондарҙа барҙы. 2014 йылда Баймаҡ районында үткән сарала бөрйәндәр, һәр бер сара ниндәйҙер ерлеккә бәйле булған һымаҡ, был конкурс та "Урал батыр" эпосы төйәге булараҡ, Бөрйән ерлегендә үтергә тейеш, тип сығыш яһағайны һәм был ысынлап та шулай. Тәбиғәткә күҙ һалһаҡ, Урал батыр йәшәгән замандағы һымаҡ бит бында. Халыҡ тарафынан да Бөрйән Йәнбикә менән Йәнбирҙенең эҙҙәре ҡалған ер, Урал батыр төйәге тип ҡабул ителә. Быға топонимик атамалар ҙа булышлыҡ итә. Тәүге йылдар эҙләнеүҙәр дәүере булды - 2000 йылдар башында бәйге аҙна, 5-6 көнгә һуҙыла торғайны. Һуңғы йылдарҙа ике тур - эпосты яттан һөйләү һәм сәхнәләштереү тормошҡа ашырыла. Бер нисә йыл элек бәйгелә 200-300 бала ҡатнаша ине, хәҙер эш күпкә еңелләште. Үткән йыл да, быйыл да шуға иғтибар иттек - бәйгегә зона этабында һайлап алынған көслө бәйгеселәр генә килә. Сығыштар бәйге талаптарына яуап бирә. Сибай, Баймаҡ ҡалалары уҡыусылары бик матур тәьҫир ҡалдырҙы...

Халҡыбыҙҙың милли бренды дәрәжәһенә күтәрелгән, рухи гимнына әүерелгән, боронғолоғобоҙҙо бар донъяға иҫбат иткән мәшһүр эпосыбыҙ балалар бәйәнендә яңғырап, рухыбыҙҙы байытты. Оло йыйын юғары нөктәлә, рух күтәренкелегендә тамамланды.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА,**
**Айнабат АҠЫЕВА,**
**Бөрйән районының "Таң" гәзите хәбәрселәре.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (16) дүшәмбе | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 11 (17) шишәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (18) шаршамбы | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |
| 13 (19) кесе йома | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (20) йома | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (21) шәмбе | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (22) йәкшәмбе | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ*

# ҠИТҒАЛАРҘЫ ҺОҠЛАНДЫРЫР...

## ҡурай моңо



**Замандаштарыбыҙ араһында шундай йәштәребеҙ бар, уларҙың һөнәре нисәү икән, тип уйларға мәжбүр булаһың ирекһеҙҙән. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ бына тап шундай уҙамандар рәтенән. Әле генә Октябрьский ҡалаһында үткән Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика Ҡурай байрамында Гран-при яулаусы һәләтле ҡурайсы, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле солисы Юнир Һағынбаев беҙҙең һорауҙарға яуап бирә.**

**Юнир, һинең быға тиклем дә төрлө бәйгеләрҙә Гран-при яулауыңды беләбеҙ, ҡурайсы өсөн ниндәй конкурс иң абруйлыһы иҫәпләнә?**

- Ҡурай бәйгеләрендә икенсе тапҡыр Гран-при алдым, уның беренсеһе 2013 йылда Күмертау ҡалаһында Зыя Хәлилов хәтеренә арналған башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары фестивалендә булды. Йыр буйынса "Оҙон көй" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларының төбәк-ара конкурсында һәм "Башҡорт йыры" телевизион конкурсында Гран-приға эйә булдым. Йыр - күңел өсөн, ә ҡурай - ул минең һөнәрем. Ошо йүнәлештә 9 йыл белем алғанмын, шуға ла хеҙмәтемдең емештәрен татырға тейешмен, тип иҫәпләйем. Ҡурай республикала яҡшы үҫешкән һәм бәйгеләрҙең дә һәр береһе мәртәбәле. Уларҙың береһенә лә етди әҙерләнеһеҙ барып булмай. Октябрьскийҙағы Ҡурай байрамы ла, Йылайырҙа үткән Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге конкурс та, Хәйбулла районындағы Йомабай Иҫәнбаев исемендәге бәйгелә, Өфөлә үткән Әҙеһәм Искужин исемендәге конкурс та ошондайҙар рәтенән. Әле атап үтелгән конкурстарҙа мотлаҡ шарт та бар - ҡурайсы алдан билдәләнгән исемлектәге 100 көйҙө белеп барырға тейеш. Шуға ла көсһеҙҙәр килмәй уларға, һәр кем еңеү яуларға килә.

**Ҡурай - ул милли уйын ҡоралыбыҙ ғына түгел, ул башҡорт рухының бер сағылышы, ә һинең өсөн ҡурай нимә?**

- Кеше киләсәккә үткәне аша баға. Ҡурай башҡорт халҡының үткәнен киләсәге менән бәйләй. Ул минә дәрт-дарман, көс бирә, алға ынтылыш уята. Минең яҙмышыма әүерелгән инде ул. Әлеге мәлдә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамблендә эшләп йөрөйөм, шулай уҡ йәштәргә ҡурай серҙәрен төшөндөрөү эшен дә дауам итергә ниәтем бар. Былтыр ансамбль менән Англияға барғайныҡ, быйыл Венгрияға йыйынабыҙ. Мин ҡурай моңоноң бөтөн донъяны хайран итеүен күреп йөрөйөм. Ябай ғына көпшәнән нисек шундай моң сыға һуң, тип аптырайҙар. Былтыр Англияла сәфәр ваҡытында ҡала мэры менән осрашыуҙа уға ҡурай эшләп бүләк иттек. Йомабай Иҫәнбаев Парижда саҡта ошолай ҡурай эшләп, уйнап күрһәткәс, бер ханым уға алтын балдағын бүләк итә. Минә алтын бүләк итмәһәләр ҙә, алтынға тиң һүҙҙәр әйтелдә. Күпме заман үткән, ә ябай ғына үлән ҡурай һаман ҡитғаларҙы һоҡландыра.

**Киләһе бейеклек тураһында ла хыялланаһыңдыр, моғайын?**

- Әлбиттә, камиллыҡтың сиктәре юҡ. Уҡытыусым, остазым Нурғәле Мирғәле улы Ҡайыҡбирҙин беҙҙе гел дәртләндереп тора. Ул үҙе бөтөн ғүмерен профессиональ ҡурайсылар әҙерләүгә бағышланы - был да үҙенә күрә фиҙакәрлек. Уҡытыусыбыҙ 50 йәште үткәс кенә бәйгеләрҙә ҡатнаша башланы, ҡайһы саҡта уның менән бергә ярышырға ла тура килә. Былтыр Йомабай Иҫәнбаев исемендәге бәйгелә уның уҡыусылары Рәмил Ҡотдосов - беренсе, мин - икенсе, Динар Абдуллин өсөнсө урын яуланыҡ. Үксәгә баҫып киләһегеҙ, афарин, тип торған остазыбыҙ, мине аңлап, һәр эшемә фатихаһын биргән, терәк булған ғаиләм булғанда киләсәккә уй-хыялдар ҡороп йәшәмәйенсә булмай. Уларҙы Байрас менән Ғайсарҙы ла рухлы егеттәр итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ кәләшем Эльвира менән. Шуға, барыһы ла алда әле, тип иҫәпләйем.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы журналист, прозаик, шағирә һәм драматург Сәрүәр Суринаның ижады һәм биографияһы буйынса викторина тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Сәрүәр Сурина республика әҙәби, мәҙәни, фольклор байрамдарының сценарий авторы. Ул башлаған ниндәй сара һаман дауам итә?**

а) Салауат йыйыны;
б) Зәйнәб Биишева көндәре;
в) Аҡмулла көндәре;
г) Башҡорт халыҡ уйындары.

**2. Сәрүәр Сурина бөгөнгө көндә ниндәй вазифала иң оҙаҡ эшләгән башҡорт журналисы булып тора?**

а) Башҡортостан телевидениеһы редакторы;
б) драматург;
в) тәржемәсе;
г) балалар яҙыусыһы.

**3. Сәрүәр Сурина руссанан башҡорт теленә тәржемә иткән ун биш классик әҫәр театр сәхнәләрендә бара. Тәржемәсе эшен ул ҡайһы авторҙың пьесаһынан башлай?**

а) А.Островский;
б) У.Шекспир;
в) К.Гольдони;
г) В.Ольшанский.

**4. Сәрүәр Сурина ниндәй телетапшырыуҙар теҙмәһе өсөн Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы исемен ала?**

а) "Әкиәт йомғағы";
б) "Орнамент";
в) "Донъяның аҡ кейеҙе";
г) "Урал батыр" ҡобайырын башҡарыусылар".

**5. Сәрүәр Суринаның ниндәй әҫәре бер театрҙа бер нисә мәртәбә ҡуйылды?**

а) "Алтын балта";
б) "Ҡаҙ батшаһы";
в) "Янһарының тылсымлы сanaһы";
г) "Аҫыл йөрәк".

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул Сәрүәр Суринаның автографы ҡуйылған "Ҡот тәңкәһе" йә "Сыйырсыҡ тәсбихе" китаптарын алып һөйөнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Рубриканы Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҘҒА ҠӘНӘҒӘТ ИТМӘГӘН...

## күбен күрмәҫ

Йығылған ағасҡа балта менән сабыусылар күп була.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхет - ул үҙ яҙмышыңа күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

Ас кешене ашатҡын килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын, тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

Был хеҙмәтемде мин Леонор исемле ҡыҙыма бағышлайым. Уның ярҙам, дәртләндереүҙәре булмаһа, китабымды ике тапҡырға тиҙерәк яҙып бөтөр инем.

**(Пелем Вудхауз).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ кисен минә дуҫым шылтыратты. Тәүге һорауы шул булды: "Хәлдәрең нисек?" Мин уйлап та тормаҫтан: "Эс боша", - тип әйтеп һалдым. Дуҫым: "Телəйһеңме, мин хәҙер һинә килəм һәм һөйләшербеҙ", - тине. Мин "Кил", тинем, һәм ул ун биш минуттан минең өйҙә ине инде. Дуҫым менән төнө буйы һөйләшеп ултырҙыҡ, мин уға үҙемдең аһ-зарымды түктем. Ысынлап та, проблемаларым байтаҡ йыйылып киткәйне. Дуҫым мине тыңланы, сабыр ғына кәңәштәрен бирҙе, ниндәй проблеманы нисегерәк хәл итеү юлдарын өйрәтте. Миңә еңел булып ҡалды. Шунан дуҫым эшкә китергә йыйына башланы. Миңә уңайһыҙ булып китте,"Ниңә һин үҙеңдең эшкә барырға тейешлеген тураһында әйтмәнең, мин һине төнө буйы үҙемдең хәбәрем менән йонсоттом", - тинем дуҫыма. Дуҫым йылмайҙы һәм: "Дуҫтар ни өсөн кәрәк һуң!" - тине. Дуҫымды машинаға оҙатҡанда: "Ә һин миңә кисен ниңә шылтыратҡайның һуң?" - тип һорарға баш етте. "Мин врачта булғайным һәм ул миңә бик ҡурҡыныс диагноз ҡуйҙы", - тине дуҫым. - Ләкин беҙ был хаҡта аҙаҡ һөйләшербеҙ".**

**Мин ошо осрашыуҙан һуң байтаҡ уйланып йөрөнөм. Был хәл миңә ныҡлы һабаҡ булды. Мин хәҙер үҙ проблемаларымды шаштырыуҙан туктап, яҡшы хәбәрҙәр менән ләззәтләнәм. Үҙем яратҡан кешеләр, дуҫтарым менән аралашҡанда аһ-зар һөйләп түгел, ә ваҡытты файҙалыраҡ итеп үткәрергә тырышам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирлек:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1390/06